*Бер ауыл халҡы ауыл эргәһендәге тауға һәр кем үҙенсә атама биргән. Шул атама буйынса ауылдаштар йыш ҡына бәхәсләшә торған булған, шунан был бәхәс дошманлашыуға алып килгән. Был дошманлыҡты һәм һуңғы көскә тиклем бер-береһенә ҡаршы көрәшергә кәрәклекте улар балаларына мираҫ итеп ҡалдырған. Ә бит улар был тауҙы бер төрлө күргән һәм яҡынса бер төрлө исем менән атаған... Бәхәс объекты көсөгөҙҙө һәм ваҡытығыҙҙы сарыф итеүгә лайыҡлымы - башта шул хаҡта уйлағыҙ.*


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

7 - 13 АПРЕЛЬ (АЛАҒАРАЙ) 2012 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№14 (484)



БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Исеменә күрә есеме



3

Ауылда ҡалырғамы,



8-9 әллә ҡалаға күсенергәме?

Моңло халҡым өсөн...




11

Хиджама -

халыҡ дауаһының бер ысулы



12

14 ТВ-программа


ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# ИР-АТ БИРГӘН ҺАБАҠТАН...

## ир ҙә, ил дә үҫер

**Баш ҡалала "Башҡорт теле һәм әҙәбиәте йыл уҡытыусыһы - 2012" төбәк-ара конкурсы тамамланды. Зиһен ҡеүәте, аң-белем өлгөһө, рух сығанағы, күңел байрамына әүерелгән был һөнәри һәм ижади ярыш инде 17-се тапҡыр үткәрелеп, райондарыбыҙҙан, күрше өлкәләрҙән 57 педагогты бергә йыйҙы. Быйыл конкурста Һамарҙан, Силәбенең Арғаяш, Ҡоншаҡ райондарынан, Ырымбур өлкәһенән биш уҡытыусы ҡатнашты. Ҡатнашыусылар араһында ир уҙамандарҙың күп булыуы ҡыуандырҙы ойоштороусыларҙы. Конкурста был юлы 9 ир-зат һөнәри оҫталығын күрһәтте.**

### Милләт бәҫен күрһәт

Талантлы, ижади ҡарашлы уҡытыусыларҙы табыу, уларҙың тырыш хеҙмәтен баһалау, шулай уҡ ата-әсәләр, уҡыусылар, йәмәғәтселек алдында башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыларының абруйын күтәреү, яңы уҡытыу алымдары менән уртаҡлашыу кеүек әһәмиәтле маҡсаттарҙы тормошҡа ашырған мәртәбәле сараны конкурс, ярыш тип ҡарауҙан бигерәк, тәжрибә майҙаны булараҡ ҡабул итергә кәрәк. Ысынында был шулай ҙа. Педагогтар шәхси мәнфәғәттәрен уйлауҙан, исем, танылыу алыу теләгенән бигерәк, конкурста ҡатнашып, дөйөм бурысҡа - телебеҙҙе үҫтереүгә үҙ өлөшөн индерә. Уларҙы илһөйәрҙәр өлгөһө итеп тә күрһәтергә кәрәк. Конкурста ҡатнашыусы уҡытыусылар үҙҙәре, конкурсты күҙәтеүселәр ҙә әйтеүенсә, бер-береһенә дәғүәсе итеп ҡараманы, ә һәр кем бер-береһенең ярҙамын тойҙо. Жюри рәйесе филология фәндәре докторы, профессор Ғиниәт Ҡунафин конкурсты асыу тантанаһында: "Беҙ ошо ярыш менән башҡорт телебеҙҙең, әҙәбиәтебеҙҙең, рухиәтебеҙҙең, интеллектуаль кимәлебеҙҙең ниндәй хәлдә булыуын күрһәтәбеҙ. Ошо ярышыбыҙҙы үҙебеҙҙең маһирлығыбыҙҙы, тәбиғәтебеҙҙе асыр сара итеп кенә түгел, халҡыбыҙҙың, республиканы барлыҡҡа килтергән милләттең йөҙөн, уның бәҫен һаҡлар һәм үҫтерер дәүләт кимәлендә үткәрелгән сара тип күрәм мин. Ҡатнашыусыларҙың башҡорт теле, мәҙәниәте алдында торған бурыстарыбыҙ күҙлегенән сығып эш итеүен теләйем", - тигәйне.

(Дауамы 6-сы биттә).



Гран-При яулаусы Рифат Әйүпов.

ҺӨЙӨНСӨ!

# БАЛАЛАР...

## гимназияһына ҡайтты

**Ошо көндәрҙә баш ҡаланың Дим районында ҡыуаныслы ваҡиға булды: 102-се башҡорт гимназияһы капиталь ремонт үтеп, яңырып, матурланып, уҡыусылар һәм уҡытыусылар ҡарамағына тапшырылды. Тантанала Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялалов та ҡатнашты. Ул үҙ сиратында Дим районы халҡын күркәм байрам менән ҡотланы һәм мәғариф стандарттарына тап килтереп эшләнгән уҡыу йортонда уҡытыу ҙа, белем алыу ҙа тейешле кимәлдә атҡарылыр, тигән ышанысын белдерҙе.**

(Дауамы 4-се биттә).



ИҒТИБАР!

# БӘЙГЕГӘ САҠЫРАБЫҘ!




Интернетта "Киске Өфө" гәзитенең бәйгеһен иғлан итеүебеҙ тураһында хәбәр иткәйнек инде: **"Алдар менән Ерәнсә ҡоро"**на башҡорт юморы оҫталарын саҡырабыҙ. Ысын юмор, мәрәкә, мәҙәк, лаҡап, көләмәстең иң кәттәһе халыҡтың йәнле аралашыу мөхитендә йәшәй икәнен беләбеҙ. Һуңғы ваҡытта сәхнәләрҙә тоҙһоҙ һәм "билдән түбән" мәрәкә һөйләүселәр күбәйеүен иҫәпкә алғанда, ысын юморҙы эҙләп халыҡ араһына сығыу мөҙҙәте еткәне аңлашыла.

Шуға ла юмор оҫталарына мөрәжәғәт итәбеҙ: "Һеҙҙең ауылда нисектер, ә бына беҙҙең ауылда..." тип башлағыҙ һүҙегеҙҙе һәм йәшәгән төбәгегеҙҙәге, ауылығыҙҙағы лаҡап, көләмәс, мәрәкә хәлдәрҙе видеотаҫмаға яҙҙырып, "Вконтакте" сайтындағы "Киске Өфө" төркөмө"нә (**vk.com/kiskeufa**) ҡуйығыҙ. Тулыраҡ мәғлүмәтте лә шул сайтта табырһығыҙ. Бәйгебеҙҙә балалар ҙа, йәше-ҡарты ла ҡатнаша ала. Уға йомғаҡ июнь баштарында яһала һәм еңеүселәргә иҫтәлекле бүләктәр тапшырыла. Бәйгегә ҡушылығыҙ, мөхтәрәм йәмәғәт!

ӘЙҘӘ, АҠСА ЭШЛӘЙЕК!

# КЕМДЕР ЙОҠО ҺИМЕРТӘ...

## кемдер аҡса эшләй



**Йылғыр һәм йылдам студенттың башы аҡса эшләү өсөн "өйөрөлөп" эшләп тора. Ул ваҡытлы ла, даими ҙа эш таба һәм стипендияһына ҡуш булырҙай аҡса эшләй.**

Гәзиттең "Әйҙә, аҡса эшләйек!" рубрикаһына курсташым Азаттың нисек аҡса эшләүе хаҡында яҙырға булдым. Ул университеттың беренсе курсында уҡығанда уҡ ата-әсәһенән бер тин дә аҡса алмай ине, сөнки уҡыу башланып, бер-ике аҙна үтеүгә, эшкә урынлашты. Әлбиттә, уның әрме хеҙмәтенән һуң уҡырға килеп, курсташтарына ҡарағанда донъяны бер аҙ күргән-белгән егет булыуы ла үҙ ролен уйнағандыр. Хәйер, курста унан башҡа ла әрменән һуң уҡырға ингән егеттәр бар һәм уларҙың күбеһе һуңғы курсты тамамлағансы өйҙән аҡса һурҙы. Тимәк, бында хикмәт кешенең үҙендә, тип һығымта яһарға мөмкин. Азат ятағыбыҙға яҡын ғына урынлашҡан балалар баҡсаһына төнгө ҡарауылсы булып эшкә урынлашты. Кемдер уйлауынса, был эш балалар баҡсаһына барып, йылыла ғына йоҡлап ятыуға ҡайтып ҡалмай. Иртә таңдан тороп, тирә-яҡты йыйыштырыу, һепереү, ҡышын бина тирәләй ҡар көрәү, ҡайһы саҡта ҡыйыҡ башынан да ҡар төшөрөү, ашнаҡсылар килгәнсе (ә улар иртәнге 5-6-ла эш урынында була), ҙур-ҙур һауыттарҙа һыу ҡайнатып ҡуйыу һәм башҡа төрлө эштәр - барыһы ла Азаттың елкәһендә ине. Ул ваҡытта башҡа студенттар йоҡо һимертә һәм түшәктән тороу хаҡында уйламай ҙа әле.

Эшенә яуаплы ҡараған кеше һәр саҡ ихтирамға һәм ышанысҡа лайыҡ. Курсташым да, баштан уҡ үҙенең етдилеге, һәр эшен урын-еренә еткереп башҡарыуы менән балалар баҡсаһы етәкселегенең күңелен яуланы һәм уҡыуҙы тамамлағансы шунда эшләне. Шуны ла билдәләргә кәрәк: Азаттың шулай төнөн эшләүе уҡыуына бер хилафлыҡ та килтермәне һәм ул ҡулына "дүртле" һәм "бишле" билдәләре менән генә тулы диплом тотоп сыҡты. Теләк булғанда һәм ялҡаулыҡты йүгәнләгәндә, күңелгә ятыр эш табырға һәм кеҫәнең бер ҡасан да буш булмауын тәьмин итергә була.

**Фәнил СОЛТАНОВ.**
**Өфө ҡалаһы.**

БАШ ЙОРТТА...

# БАШҠОРТ МОҢО...

## бөтә ерҙә яңғыраһын



**Силәбе өлкәһендә тыуып үҫһәм дә, бала саҡтан Өфөгә, ғөмүмән, Башҡортостанға, туғандарыма килергә атлығып тора инем, сөнки бындағы кеүек матурлыҡ башҡа бер ҡайҙа ла юҡ.**

Быйыл үҙем Өфөгә күсеп килдем. Хатта бер хәсрәтһеҙ йәшәлгән атай йортонан сығып китеп, эштән ҡайтыуыма тәмле итеп ашарға әҙерләп көтөп тороусы әсәйем янда булмаһа ла, Өфөлә йәшәү шатлығым ҙур. Өфө үҙенең яҡтылығы, күркәмлеге, ихласлығы менән күңелгә яҡын. Бында йәшәүсе халыҡ бер-береһенә лә, килеүсе ҡунаҡтарға ла һәйбәт мөғәмәлә һәм ихтирам күрһәтә. Төрлө динле бихисап милләтте бергә туплауына ҡарамаҫтан, күҙгә бәрелеп торған ҡапма-ҡаршылыҡтар юҡ, ғөмүмән, толерантлыҡ көслө, тип әйтер инем. Был бигерәк тә урындағы халыҡҡа, йәғни башҡорттарға, хас сифат. Ошо айырмалыҡ башҡа ҡалалар менән сағыштырғанда күҙгә асыҡ сағыла.

Шулай уҡ Өфө таҙалыҡ яғынан да күп ҡалаларҙы артта ҡалдыра. Хикмәт ҡаланы таҙалыҡта тотоусы ойошмаларҙың тырышлығында ғына түгелдер, өфөләләрҙең үҙҙәренең тыуған ҡалаһына булған ихтирамында, битараф булмауындалыр, тип уйлайым. Ләкин ҡайһы бер ойошма, предприятие, магазиндар алдында ҡый ташлау һауыттарының булмауы эште хөртәйтә. Бындай ойошма етәкселәренән сүп һауыттары тураһында хәстәрләүҙе талап итергә кәрәк. Шулай уҡ ҡала урамдарында йәмәғәт бәҙрәфтәре урынлаштырыу мәсьәләһе лә хәл ителһә, яҡшы булыр ине. Әлбиттә, улар ҡаланың тышҡы йөҙөн боҙмаҫҡа һәм артыҡ күҙгә бәрелеп ултырмаҫҡа тейеш.

Әле мин Черниковка биҫтәһендә йәшәйем һәм, әйтергә кәрәк, ундағы инфраструктура яҡшыртыуҙы талап итә. "1 Май" һәм уға яҡын урамдарға ҡарап фекер йөрөткәндә, барыһы ла һәйбәт кеүек, ләкин төпкәрәк үтһәң, хәл итәһе мәсьәләләр күп икәнлеген аңлайһың. Әллә ҡасан төҙөлгән ике ҡатлы иҫке йорттар күптән һүтеүҙе көтә. Һары төҫтәге ошо йорттарға ҡараһаң, күңелде ниндәйҙер һағыш баҫҡан төҫлө. Әлбиттә, быларҙың барыһын да тиҙ генә эшләп булмай, шулай ҙа ҡала хакимиәте был мәсьәләне күҙ уңынан ысҡындырмаҫ, тип ышанғы килә.

Өфөлә төҙөлөш эштәренең етеҙ темпта барыуын күреү ҡыуаныслы, сөнки торлаҡ йорттар, башҡа төрлө объекттарҙың төҙөлөүе ҡаланың үҫә икәненә асыҡ дәлил. Миңә бигерәк тә хәҙерге торлаҡ йорттарҙың элекке кеүек һоро, бер төрлө итеп түгел, ә архитектура, стиль яғынан да уйлап эшләнеүе оҡшай. Шулай уҡ бөгөнгө көндә торлаҡ йорттарҙың төрлө мәҙәни-көнкүреш ойошмаларын, магазиндарҙы үҙ эсенә алған тотош микрорайондар итеп урынлаштырылыуы ла бик уңайлы һәм зауыҡлы.

Баш ҡалала оҡшап етмәгән тағы бер мәсьәлә - ул йәмәғәт транспорттарының үтә лә күп булыуы. Ишетеүемсә, маршрут автобустары Өфөлә кәрәгенән биш тапҡырға артыҡ икән. Улар араһында һәр тин өсөн ҡаты алыш барғанлығын аңлау өсөн ҙур һәләт кәрәкмәй. Күп булыу менән бер рәттән, ҡайһы берҙәренең салоны бысраҡ була, һаҫыҡ еҫ килә. Бындай күренеш ҡала ҡунаҡтарында ыңғай фекер тыуҙырмайҙыр ул. Шулай уҡ маршрут автобустарының киске сәғәттәрҙә бик һирәк йөрөүе лә бәкәлгә һуға.

Һүҙемде позитив нотала тамамлағым килә. Ял көнөндә "Семья" сауҙа йортондағы "Карусель" магазинында динамиктан башҡорт йырҙары ағылыуын ишетеп ҡыуандым. Бар ерҙә лә ошолай булһа, үәт шәп булыр ине!

**Илдар ХӘСӘНОВ.**

ИҒТИБАР!

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**Апрелдә 2012 йылдың икенсе яртыһына 50665 индекслы "Киске Өфө"гә 354 һум 24 тингә яҙылып, квитанцияһын редакциябыҙға ебәргән өс уҡыусыбыҙ "400 башҡорт халыҡ йыры" китабына эйә буласаҡ. Бәхетегеҙҙе һынап ҡарағыҙ ҡана!**

Ә мартта гәзитебеҙгә яҙылыусылар араһынан Баймаҡ районы Ярат ауылынан Әнүәр Мырҙабулатов, Әлшәй районы Яңы Сәпәш ауылынан Гөлйөҙөм Йәғәфәрова - **башҡортса "Ҡөрьән-Кәрим"**, Белорет районы Ботай ауылынан Р. Ирғәлина, Ҡырмыҫҡалы районы Иҫке Муса ауылынан Факиһа Өмөтбаева, Ғафури районы Сәйетбаба ауылынан Фаил Сабитов **"400 башҡорт халыҡ йыры"** китаптарына лайыҡ булды.

**МӨХӘРРИРИӘТ.**



Мәләүез районының башҡорт теле уҡытыусылары.

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓БР Президенты Рөстәм Хәмитов боҙҙа мотоуҙыш буйынса һигеҙ тапҡыр донъя чемпионы Николай Красников менән осрашты. Николай Красников Швецияның Упсала ҡалаһында үткән 47-се шәхси донъя чемпионаты этабында дүртенсе урын алды һәм йыйылған мәрәйҙәр суммаһы буйынса еңеү яуланы.

✓Мәҙәни мираҫ объекттарын һаҡлау мәсьәләһенә арналған түңәрәк ҡорҙа БР Президенты Рөстәм Хәмитов Өфөлә тарихи-мәҙәни ағас архитектура ҡомартҡылары музейын булдырыу кәрәклеген билдәләне. Шулай уҡ күптән инде күтәрелә килгән Өфө-II ҡаласығы мәсьәләһен хәл итергә кәрәклеге лә һыҙыҡ өҫтөнә алынды. "Әммә бында фән һәм мәҙәниәтте сәйәсәттән айырырға кәрәк, сөнки бик йыш барыһы ла сәйәсиләштерелә, - тине Президент.- Минең ҡарашҡа, унда музей экспозицияһын эшләргә, территорияның бер өлөшөн һаҡлап ҡалып, реконструкция үткәрергә, ә Октябрь революцияһы урамының бер өлөшөн йәйәүлеләр зонаһына әйләндерергә мөмкин булыр ине".

✓Ғаиләне, әсәлекте, атайлыҡты һәм балалыҡты һаҡлау буйынса ведомство-ара советтың киңәйтелгән ултырышында БР Президенты Рөстәм Хәмитов ҡатнашты. Билдәләнеүенсә, һуңғы өс йылда беҙҙә тәбиғи үҫеш күҙәтелә. Былтыр сабый үлеме - 3 процентҡа тиерлек, әсәләр үлеме 20 проценттан ашыуға кәмегән. Әммә шул уҡ ваҡытта республикала тыуым да кәмегән. 2010 йылда мең кешегә 14 бала тура килһә, быйыл был һан 13,7 тәшкил итә.

✓"Башҡортостан" гәзите редакцияһында баҫманың 95 йыллығына арналған фотокүргәҙмә асылды. Гәзиттең генә түгел, бөтә республиканың да тарихын сағылдырған 150 фотоһүрәт Матбуғат йортоноң 5-се ҡатында стендтарҙа урынлаштырылған. Фотоларҙың күпселек өлөшө - редакция архивынан. Республика Президентының матбуғат секретары Артем Вәлиев барлыҡ фотоларҙы цифрлаштырып, гәзиттең сайтында виртуаль музей булдырырға тәҡдим итте.

✓Апрелдең икенсе декадаһында Башҡортостанда йылғалар ташыуы көтөлә. Ошо көндәрҙә авария-ҡотҡарыу отрядтарының техника һәм ҡорамалдар әҙерлеге тикшерелде. Билдәләнеүенсә, һыу баҫыу йәки тәбиғи янғындар сығыу ихтималлығы булған территорияларҙы тикшереү өсөн ҡотҡарыусылар фото- һәм видеокамераһы булған пилотһыҙ идара ителеүсе осоу аппараты, мотопомпалы йөҙөү саралары, бронетранспортерҙар менән файҙалана ала.

*✓ Сит исемдәрҙе йөрөтөүселәрҙе мин талантһыҙ, һәләтһеҙ тип әйтмәйем, әммә улар тәбиғәттән бирелгән ошондай һәләттәре, талантттары булған көйө лә, тәғәйенләнеше буйынса үҙ урынында булмай сыға.*

МИЛЛИ ИДЕЯҒА ТОРОШ

# ИСЕМЕНӘ КҮРӘ ЕСЕМЕ

**Был әйтемдең "Силәгенә күрә ҡапҡасы" тигән варианты ла бар, әммә тәүгеһенең мәғәнәһе киңерәк һәм ҡапма-ҡаршылыҡлы йөкмәткеле булғанға оҡшаған. Сөнки икенсе әйтемдәге "силәк" менән "ҡапҡас" йәнәшәлеге уларҙың күберәген форма, үлсәм буйынса ғына тап килеүен талап итһә, тәүге осраҡта мәғәнә, асыл, йөкмәтке, булмыш, билдә, атама хаҡында һүҙ бара. Исемдең - есемгә, есемдең исемгә тап килеүе асылға, булмышҡа, хәҡиҡәткә тоғролоҡ хаҡындағы тәғлимәткә барып ялғана. Әгәр ҙә ошо гармония емерелһә, донъя ла емерелер, кешелек тә юҡҡа сығыр һымаҡ. Шулай булғас, был әйтем һис һүҙһеҙ милли идеяға торошло, уның кешене, кешелекте һәм милләтте һаҡлап ҡалыр йөкмәткеһе барлығы кешенең үҙ асылына, иманға тоғролоғона тиң булғандай бәхәсһеҙ. Ысынлап та, исемдең есемгә тап килеүе мөһимме, әллә - киреһенсәме? Шул хаҡта фекер йөрөтөп ҡарайыҡ.**



Беҙҙең яҡта һуғыш ваҡытынан ҡалған бер лаҡап йөрөй. Бер ир кеше һуғышҡа китеп, күпмелер ваҡыт үткәс, киткәнендә ауырлы ҡалған ҡатынынан һөйөнсө хаты алған. "Һау ғынамы, баһадирым, нисек унда хәлдәрең, дошмандарҙы юҡ итеп буламы? Атаһы, һөйөнсө, яңыраҡ улыбыҙ тыуҙы, һуйған да ҡаплаған, тас үҙең инде, сәңгелдәктә талпынып ята. Үҙенә Альберт тип исем ҡуштыҡ..." тип башлап киткән ҡатыны хатын. Ире уға хат аша асыуланып: "Ҡаҡшатҡанһың икән ул исемде ҡушып, беҙ бында бер альберттарҙы бөтөрә алмай йөрөйбөҙ, ә һин унда... фәлән-фәсмәтән..." - тип яуап яҙып ебәргән. Был хәл булғанмылыр-юҡмылыр, һәр хәлдә, яугирҙың асыуын аңларға була. Ни өсөн тигәндә, Альберт, ысынлап та, германдарҙың исеме һәм, үкенескә күрә, XX быуатта беҙҙең милләткә лә сит исемдәр сире йоҡто.

Исемгә ҡарап есемдең формалашыуы, есемдең исемгә бәйлелеге тураһында беҙ бик күп кенә миҫал-дәлилдәр килтерә алыр инек. Бер мәл ҡыҙыҡ өсөн генә тип, исем-аттары үҙебеҙсә ҡушылмаған милләттәштәремдең тормошон күҙ алдына килтереп, үҙемсә ҡыҙыҡ ҡына һығымталар ҙа яһағайным. Ундай исемдәрҙе йөрөтөүсе кемделер уңайһыҙ хәлгә ҡуймаҫ өсөн, ул исемдәрҙе атап тормайынса ғына, ҡайһы бер фекерҙәремде әйтеп үтәм. Сит милләттән алынған йә булмаһа халыҡ-ара исем-аттарҙы йөрөтөүселәрҙең мин күҙ алдына килтергәндәренең 95 процент самаһының тормош юлы бик ҡатмарлы, ғаиләләре тарҡалған йә булмаһа яҙмыштары емерелгән булып сыҡты. Ә инде ҡалған 5 процентҡа ҡараусылар үҙ ғүмерҙәрендә ниндәйҙер уңыш, ғаилә бәхете, карьера бейеклеге яулаған осраҡта ла, улар быға саманан тыш ихтыяры, ҡаратырышлығы, үтә егәрлеге һәм эшһөйөүсәнлеге ярҙамында ғына өлгәшкән. Был осраҡлы ғына тап килеүҙер тип уйлайһығыҙ икән, таныштарығыҙ, дуҫтарығыҙ, туғандарығыҙ араһынан сит йә бер ниҙе лә аңлатмаған мәғәнәһеҙ исемлеләренең яҙмыштарын, тормош юлын күҙ уңынан үткәреп ҡарағыҙ.

Сит исемдәрҙе йөрөтөүселәрҙе мин талантһыҙ, һәләтһеҙ тип әйтмәйем, әммә улар тәбиғәттән бирелгән ошондай һәләттәре, талантттары булған көйө лә, тәғәйенләнеше буйынса үҙ урынында булмай сыға, осраҡлы кеше менән ғаилә ҡора, үҙенә тиң булмаған кешеләр менән аралашып, үҙ асылына ят булған мөхит барлыҡҡа килтерә һәм шул арҡала ғүмерен заяға үткәрә. Бер шағир әйтмешләй, уларҙың "Шағир булырҙайҙары - шофер, шофер булырҙайҙары шағир булып йөрөй..."

Яйы сыҡҡанда тағы ла бер төркөм исем-атлылылар хаҡында әйтеп китергә кәрәктер. Ундайҙар иһә совет осоро неологизмы йоғонтоһонда бөтөнләй мәғәнәһе булмаған яһалма ялтырауыҡ исемдәрҙе йөрөтөүселәр. Уларының иһә, бөтөнләй яҙмыштары булмай, булған хәлдә лә үҙҙәренеке булмай сыға. Ундайҙарҙың тормошо декорация ғына, хатта милли рухтары ла лозунгылар рәүешендә һымаҡ. Гәзиттең үткән йылдағы 52-се һанында шағирә Зөлфиә Ханнанованың "Уйланайыҡ! Яҙмышыбыҙ һәм иманыбыҙ тураһында" тигән мәҡәләһенә берәү ҙә битараф ҡалмағандыр: "...алдан өс-дүрт йәшлек малай йүгерә. Арттан хафаланып өләсәһе ҡысҡыра: "Джери, сынок, не торопись!" - тигән була. Йөрәгем өҙөлөп төшә яҙҙы. Америка йәнһүрәтендәге сысҡандың ҡушаматын ҡушҡандар бит балаға! Хәҙер урыҫтар ҙа балаларына Виолетта, Джонни кеүек урыҫ менталитетына хас булмаған исемдәр ҡушырға тырышҡан була бит..." тип, Зөлфиә лә балаға дөрөҫ итеп исем ҡушыу мәсьәләһенең мөһимлеген билдәләп үтә. Былар барыһы ла "Исеменә күрә есеме" тигән әйтемдең әһәмиәтен аңламауҙан килә. Үкенескә күрә, беҙҙең милләттә лә бар ундай мәғәнәһеҙ исемдәрҙе ҡушыусылар. Беҙҙең яҡта ошондай ят, мәғәнәһеҙ исемдәрҙе балаларына ҡушыусыларға бер инәй асыуланып: "Эй, ҡайҙан табалар һуң ундай мәғәнәһеҙ исемдәрҙе? Уларҙы бит урыҫтар хатта эттәренә лә, бесәйҙәренә лә ҡушмай", - тигәйне.

Исемдең есемгә, йәғни кешенең асылына, булмышына бәйле әһәмиәтен нисек аңлатырға була һуң? Белеүебеҙсә, исемде беҙгә мулла йәғни Хаҡ Тәғәлә, дин менән мөнәсәбәте булған кеше ҡуша. Әйтеүҙәренсә, был саҡта бәндәнең ғәмәл дәфтәрендә ҡушылған исеме менән тамғаланып, компьютерҙа сайт,электрон адрес йә файл асылғандай, махсус пункт-урын асыла икән. Унда кешегә ошо исемгә Хаҡ Тәғәлә тарафынан тәғәйенләгән ҡот, бәрәкәт, ырыҫ, бәхет, уны уңышлы, бәхетле һәм оҙон ғүмерле итә торған мәғлүмәт, энергия килә һәм әгәр ҙә бәндә үҙ асылына, диненә, лөғәтенә һәм милләтенә хас булмаған исем-атлы булһа, юғарыла һанап үтелгән Хоҙай бүләгенән мәхрүм ҡала. Сит йә мәғәнәһеҙ исем-аттарҙы йөрөтөүселәрҙең яҙмыштары булмауын, уларҙың тормошта уңмауын Хаҡ Тәғәләнең бүләгенән мәхрүм булыуына бәйләп аңлаталар ҙа инде. Дөрөҫөрәге, был осраҡта уларҙың үҙҙәрендә түгел ғәйеп, ә шундай исем биреүсе атайәсәйҙәрендә, уларҙың ошо хәҡиҡәтте аңлап етмәүендә. Яңы тыуған сабыйға йүргәк исеме биреү ҙә элек беҙҙең халыҡта һис тайпылышһыҙ үтәлә торған йола һаналған. Йүргәк исемен хатта сабыйҙың әсәһенә лә әйтмәгәндәр, уны тик кендек инәйҙәре генә оло сер итеп һаҡлар булған. Йүргәк исеме биреү сабыйға үҙ исемен ҡушҡанға тиклем уны ен алыштырыуҙан, күҙ тейеүҙән, нәмә ҡағылыуҙан һаҡлау маҡсатында башҡарылған. "Хәҡиҡәт йән һаҡлар..." тигән әйтем хаҡында һүҙ йөрөткәндә, беҙ Америка психологы һәм ғалимы Майкл Ньютондың "Йән сәйәхәте" тигән киң билдәле китабына туҡталғайныҡ. Мин, мәҫәлән, беҙҙең халыҡта ни өсөн йүргәк исеме ҡушылыуының бер сәбәбен шул китапты уҡып аңланым. Баҡтиһәң, яңы тыуған сабыйҙың йәне эйәһе йоҡлаған саҡта ирекле рәүештә уның тәненә инеп-сығып, башҡа тарафҡа сәйәхәт ҡылып йөрөй ала икән. Әйтәйек, сабый йоҡлап китте лә, йәне сәйәхәт ҡыла икән, ти. Һәр йән эйәһенә кире ҡайтҡан саҡта, әгәр ҙә уға йүргәк исеме ҡушылмаған булһа, ул яҡын-тирәләге ошо уҡ халәттәге икенсе баланың тәненә инеп китә лә, тегеһенең сәйәхәттән һуңғараҡ ҡалып ҡайтҡан йәне был сабыйға һыйынырға мәжбүр була. Баҡтиһәң, беҙҙе өләсәйҙәр "ен алыштыра" тип ҡурҡытҡан күренеш ошо була икән дә. Бына һиңә кәрәкһә! Ошо урында йөҙәрләгән сабыйҙар бер юлы тыуған балалар табыу йорттарында ниндәй хәлдәр барғанын күҙ алдына килтереп ҡарағыҙ. Ә бит беҙҙең халыҡта йүргәк исеме ҡушыу йолаһы бар, тип әйтер берәү. Ә ул исемдәрҙе хәҙер кемдәр ҡуша һуң? Акушерҙармы? Шәфҡәт туташтарымы? Бала табыу йорттарының баш табибтарымы?

Беҙҙең халыҡта ете быуын туғандары араһында бер үк исемде ҡушыу ныҡ тыйылған. Был йола ла һуңғы ваҡытта онотола бара. Әгәр ҙә туғандар араһында бер үк исемле ике кеше булһа, уларҙың береһе бәхетле, ырыҫлы, икенсеһенең ғүмере ҡыҫҡара, тигән аңлау бар. Ни өсөн тигәндә, бында ла әлеге лә баяғы ғәмәл дәфтәрендәге ҡот, бәрәкәт йыйылмаһы урыны булған исемгә барып төртөләбеҙ. Кем белә, бәлки, өлөшлө бәндә төшөнсәһе лә ошо күренешкә, дөрөҫөрәге, кешенең үҙ асылына тап килгән исем йөрөтөүенә бәйлелер.

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

**(Аҙағы киләһе һанда.)**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Әлмөхәмәтов исемендәге Республика гимназия-интернатының "Өфө фанфаралары" оркестры III "Art-Форум" халыҡ-ара академик һәм халыҡ музыкаһын башҡарыусылар конкурсының I дәрәжәләге дипломына лайыҡ булды. Еңеү уларға Парижда үтәсәк "Art-forum" халыҡ-ара конкурсында бушлай ҡатнашыу хоҡуғын бирҙе. Был йәш музыканттарҙың беренсе еңеүе түгел. "Өфө фанфаралары" тынлы оркестры - Мәскәүҙә үткән XII Бөтә донъя йәштәр һәм студенттар фестиваленең дипломанты, бөтә Рәсәй, республика һәм халыҡ-ара тынлы оркестрҙар конкурстары лауреаты ла. Шулай уҡ ул ул Мәскәүҙә "Алтын лира" халыҡ-ара классик башҡарыу конкурсында Гран-приға лайыҡ булғайны.

✓ "Сәйәси партиялар тураһында"ғы федераль законға үҙгәрештәр үҙ көсөнә инә. Был үҙгәрештәр сәйәси партияларҙы теркәүгә һәм уларҙың эшмәкәрлегенә талаптарҙы ярайһы уҡ еңеләйтә. Атап әйткәндә, элек партияны теркәү өсөн уның ағзаларының һаны 40 мең кеше булыу талап ителһә, хәҙер иһә был һан 500-гә тиклем кәметелде. Теркәлеү процедураһы ла үҙгәртелде. Бынан тыш, партияларҙың финанс отчет биреү тәртибе еңеләйтелә. Яңы ҡанун буйынса, сәйәси партия ете йыл рәттән һайлауҙарҙа ҡатнашмаһа, уның эше туҡтатыла.

✓Рәсәй Йәш ғалимдар союзының төбәк бүлексәһе йыл һайын үткәрелеүсе иң яҡшы ғилми эшкә конкурс старт алыуы тураһында иғлан итә. Быйыл ул физика-математика, химия, техник, гуманитар фәндәр, биология йүнәлештәре буйынса үткәрелә. Конкурста йәш ғалимдар (конкурсҡа эштәрҙе тапшырған ваҡытта 35 йәштән үтмәгән аспиранттар, фән кандидаттары һәм 40 йәшкә тиклемге фән докторҙары) һәм 1-5 кешенән торған йәш коллективтар ҡатнаша ала. Ҡатнашыуға ғаризалар 23 апрелгә тиклем Өфө ҡалаһы, Ленин урамы, 10, 1-се ҡат, 16-сы кабинет адресы буйынса ҡабул ителә.

✓Килеп тыуған гидрометеорологик шарттар арҡаһында был аҙнала Башҡортостандағы дала йылғаларында - Ағиҙел һәм Уралдың ҡушылдыҡтарында боҙ китеүе көтөлә. Улар араһында Дим, Кесе һәм Оло Ҡыҙыл, Таналыҡ, Быҙаулыҡ һәм Йәнгел йылғалары күрһәтелгән. Дала йылғаларында боҙ киткәндә тар урындарҙа боҙ тығылыуы һәм һыу кимәленең кинәт күтәрелеүе ихтимал. Тығындар булғанда һыуҙың күтәрелеп, үҙәненән сығыуы көтөлә. Йылға бассейндарындағы ауылдарҙың ярға яҡын урынлашҡан урындарын һыу баҫыуы ихтимал.

**"Башинформ"дан.**

✓ *Баш ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялалов әйтеүенсә, Өфө оҙаҡ йылдар буйы шәхси йорт төҙөүгә бушлай ер участкаһы бүлеү яйға һалынмаған муниципаль берләшмә булып килде. Хәҙер был мәсьәлә яйға һалына.*



ҺӨЙӨНСӨ!

# БАЛАЛАР...

## гимназияһына ҡайтты

**(Башы 1-се биттә).**

Хәтерегеҙгә төшөрәйек: 2005 йылдан башҡорт гимназияһы статусы алған 102-се мәктәптең бинаһы емерек хәлдә ине, шуға ла 2009 йыл башында ул төҙөкләндереү өсөн ябылып, уҡытыусылар һәм уҡыусылар күрше мәктәптәргә таратылғайны. Капиталь ремонт өсөн ҡаҙнанан 150 миллион һум күләмендә аҡса бүленгәс, нигеҙенә тиклем емерелгән иҫке бина урынына 15 ай эсендә яңыһы ҡалҡып сыҡты. Әйткәндәй, иҫке бинала тамаша залы булмауҙан тыуған уңайһыҙлыҡтарҙы ла, ҡышҡы һыуыҡтарҙа балаларҙың өшөп ҡалтырауын да әле һаман яҡшы хәтерләй гимназия уҡытыусылары. Бөгөн иһә, гимназия бер сменала 500-ҙән ашыу уҡыусыға белем биреү ҡеүәтенә эйә, 200 урынға иҫәпләнгән тамаша залы, иркен китапхана, матур ашхана, яңы спорт залы бар. Туған телдәр буйынса директор урынбаҫары Зилиә Ямалетдинова әйтеүенсә, иң мөһиме, яңы бинала балалар өшөмәйәсәк.

Бер һүҙ менән әйткәндә, барыһы ла мәғариф стандарттарына тап килә был белем усағында. Китапхана хеҙмәткәре Рита Усманова, форсаттан файҙаланып, әҙәби китаптар күберәк булһа, тағы ла яҡшыраҡ булыр ине, тигән үтенесен еткерҙе. Билдәле, китапхананың бар булмышы - балаларға әҙәбиәт үрнәктәренең иң-иңдәрен ваҡытында күрһәтеп барыу. Әле китапханала 6 меңдән ашыу "хазина" һаҡлана. Гимназияла уҡыусыларҙың ялын файҙалы ла, мауыҡтырғыс та үткәреү маҡсатында икенсе уҡыу йылынан хореография, фольклор түңәрәктәре асыласаҡ. Әле бында көрәш түңәрәге эшләй - алты тиҫтәгә яҡын бала, шул иҫәптән был спорт менән ҡыҙыҡһынған кисәге уҡыусылар ҙа шөғөлләнә икән түңәрәктә.

Гимназия директоры Дамир Әхмәтйәнов белем усағының йыһаздар, башҡа уҡыу кәрәк-яраҡтары менән яҡшы тәьмин ителгән булыуы ата-әсәләрҙә ҙур ҡыҙыҡһыныу уятыуын да билдәләне. Милләтәштәребеҙҙән тыш, башҡа милләт вәкилдәре лә үҙ балаларын тап ошо гимназия уҡыусылары итеп күрергә теләй икән. Мәсьәләләрҙең иң бәкәлгә һуҡҡаны - гуманитар, теүәл фәндәрҙе башҡорт телендә лә аңлата алырлыҡ уҡытыусыларға ҡытлыҡ кисереүебеҙ, тине директор.

Тыштан да, эстән дә ялт итеп, үҙенә саҡырып торған гимназия уҡыусыларға ҡытлыҡ кисермәйәсәк, уныһына иманыбыҙ камил. Яңы уҡыу йылында беренсе тапҡыр мәктәп эскәмйәһенә ултырыусы беренсе синыфҡа барыусылар дүрт синыфҡа бүленгән дә инде. Башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Сәғирә Миңлейәрова гимназияла башҡорт мөхите булдырылыуын, был уҡыу йортон тамамлаған барлыҡ уҡыусыларҙың да киләсәктә бер-береһенә терәк-таяныс була белеүен, барыһы ла уҡытыусыларына Башҡортостанға һөйөү тәрбиәләгәндәре өсөн рәхмәт әйтеүҙәрен телгә алып китте.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Балаһы башҡорт телендә иркен аралашһын, яҡшы белем алһын, тип теләгән, әммә Дим районында йәшәп тә, төрлө сәбәптәр арҡаһында сит мәктәптәргә, лицейҙарға, гимназияларға йөрөтөргә мәжбүр булған ата-әсәләр өсөн 102-се һанлы башҡорт гимназияһы ишектәре һәр ваҡыт асыҡ, тип кенә әйтке килә хәҙергә.**

**Илгиз ИШБУЛАТОВ.**

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# ТОРЛАҠ, ТОРЛАҠ...



## ИШЛЕЛӘРГӘ - БУШЛАЙ ЕР!

**Өс йә унан күберәк балиғ булмаған бала һәм инвалид бала тәрбиәләүсе ғаиләләргә торлаҡ төҙөү өсөн бушлай ер участкаһы биреләсәк. Был эштең үтәлеш тәртибен Өфө ҡала округы Советы депутаттары раҫланы.**

Ата-әсә хоҡуғынан мәхрүм ителгәндәр, шулай уҡ уллыҡҡа бала алып та, һуңынан уны тәрбиәләүҙән баш тартыусылар ҙа ер алыуға дәғүә итә алмай. Әгәр ҙә күп балалы ғаилә быға тиклем Башҡортостандың башҡа районында йә Рәсәйҙең бүтән өлкәһендә төҙөлөш өсөн бушлай ер алған булһа, уға Өфөнән ер бирелмәйәсәк. Өфөләр бушлай бирелгән ерҙе төп тәғәйенләнеше буйынса - йорт һалыу өсөн файҙаланырға тейеш. Мәҫәлән, был участкаларҙа бал ҡорттары тотоу, һөт фермаһы төҙөү рөхсәт ителмәй. Бушлай ер участкаһы алыу өсөн Өфө ҡала округы хакимиәтенең торлаҡты иҫәпкә алыу һәм билдәләү бүлексәһенә ғариза яҙып тапшырырға, яуап килеүен көтөргә кәрәк. Ун көн дауамында комиссия бирелгән документтарҙы ҡарап сығасаҡ һәм иҫәпкә ҡуйыу-ҡуймау тураһында ҡарар ҡабул итәсәк. Ер участкалары сират буйынса таратыласаҡ. Ғаризаға түбәндәге документтарҙы ҡушып тапшырырға кәрәк буласаҡ: ғаилә башлыҡтарының паспорт күсермәһе; документтарҙы ышаныслы кешегеҙ килтергән осраҡта, нотариаль рәүештә раҫланған ышаныс ҡағыҙы; никах тураһында таныҡлыҡ күсермәһе; балаларҙың тыуыу тураһындағы таныҡлығы, 14 йәше тулғандарҙың паспорт күсермәһе; ата-әсә хоҡуғынан мәхрүм ителмәүе тураһында белешмә (опека һәм попечителлек органдары бирә); быға тиклем төҙөлөш өсөн ғаиләгә ер участкаһы бүленмәүе тураһында белешмә (уны йәшәү урыны буйынса район хакимиәтендә алырға кәрәк); Берҙәм дәүләт реестрынан һәр ғаилә башлығының нисә күсемһеҙ милеккә эйә булыуы тураһында белешмә; инвалид бала тәрбиәләүсе ғаилә инвалидлыҡ тураһындағы белешмә өҫтәп бирергә тейеш.

Баш ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялалов әйтеүенсә, Өфө оҙаҡ йылдар буйы шәхси йорт төҙөүгә бушлай ер участкаһы бүлеү яйға һалынмаған муниципаль берләшмә булып килде. Хәҙер был мәсьәлә яйға һалына. Әммә бушлай ер биреү мәсьәләһен хәл итеүҙең ҡайһы бер ҡатмарлыҡтары ла бар. Беренсенән, Өфө буйынса ла, тотош Башҡортостан буйынса ла күпме күп балалы ғаилә йорт һалыу өсөн ер бүлеүгә мохтаж икәнлеге тураһында статистик мәғлүмәт юҡ. Икенсенән, бар ғаиләләргә лә Өфөнөң үҙендә ер участкаһы табыу мөмкин түгел. Шуға ла Өфө ҡала округы хакимиәте был мәсьәләне яҡын-тирәләге Иглин, Кушнаренко районы менән бергәләп хәл итергә ниәтләй.

## ФАТИРҒА СИРАТЫҢ ҺАҠЛАНА

**РФ Дәүләт Думаһы беренсе уҡыуҙа "Рәсәй Федерацияһы Торлаҡ кодексының 56-сы статьяһына үҙгәрештәр индереү тураһында"ғы Федераль закон проектын ҡабул итте. Закон проектында әйтелеүенсә, бушлай ер участкаһы алыуға мөмкинлек бирелгән күп балалы ғаиләләрҙең социаль найм килешеүе буйынса торлаҡ алыуға хоҡуғы һаҡланасаҡ.**

Быға са йорт төҙөүгә ер участкаһы бирелгән күп балалы ғаиләләр һәм өс һәм унан күберәк балаһы булған граждандар социаль найм килешеүе буйынса торлаҡ алыуға мохтаждар иҫәбенән төшөп ҡала торғайны. Шулай итеп, Дәүләт Думаһы нигеҙҙә яҡланмаған халыҡ ҡатламына ҡараған һәм торлаҡ шарттарын үҙаллы яҡшырта алмаған ғаиләләргә ҡарата социаль ғәҙеллекте тергеҙҙе. Депутаттар фекеренсә, күп балалы ғаиләләрҙең, шул иҫәптән йәш ғаиләләрҙең лайыҡлы шарттарҙа йәшәүен тәьмин итеү илдәге демографик хәлгә лә ыңғай йоғонто яһаясаҡ.

БР Хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығының 2012 йылдың 1 ғинуарына ҡарата әҙерләнгән мәғлүмәттәренә ярашлы, Башҡортостанда 33,7 мең күп балалы ғаилә йәшәй, уларҙа 112 мең бала тәрбиәләнә. 2011 йылда республика бюджетынан был категорияға ҡараған граждандарҙың торлаҡ мәсьәләһен хәл итеүгә 100 миллион һум аҡса бүленгән, был иһә 42 ғаиләне торлаҡ менән тәьмин итергә мөмкинлек биргән. Торлаҡ сертификаты буйынса социаль түләүҙәрҙең уртаса күләме 2 миллион һумдан ашыу сумманы тәшкил иткән.

## ЙӘШТӘРГӘ АЙЫРЫМ ИҒТИБАР

**Торлаҡ мәсьәләһен хәл итеү йәштәр сәйәсәтендә лә көнүҙәк булып ҡала. 2003 йылда торлаҡ шарттарын яҡшыртыуға мохтаж йәш ғаиләләргә дәүләт ярҙамы күрһәтеү буйынса республика программаһы ҡабул итеү уларға арзан хаҡ менән торлаҡ һатып алыу мөмкинлеге бирҙе. Был хоҡуҡ менән 12974 йәш ғаилә файҙаланған.**

Субсидия биреүгә, бала тыуғанда (уллыҡҡа алғанда) торлаҡ шарттарын яҡшыртыу килешеүҙәре буйынса бурыстарҙың бер өлөшөн ҡаплауға 2003-2011 йылдарҙа 5456 йәш ғаилә, шул иҫәптән былтыр 697 ғаилә 140,5 миллион һумдан ашыу суммаға социаль түләүҙәр алған.

БР Йәштәр сәйәсәте һәм спорт министрлығында билдәләүҙәренсә, бөгөнгө көндә Программа буйынса 28975 йәш ғаилә сиратта тора. Бынан тыш, Әбйәлил, Ауырғазы, Баҡалы, Балтас, Балаҡатай, Бишбүләк, Благовар, Ғафури, Йәрмәкәй, Йылайыр, Иглин, Ҡыйғы, Кушнаренко, Көйөргәҙе, Мәсетле, Нуриман, Стәрлебаш, Учалы, Хәйбулла райондары 2011 йылда "Торлаҡ" федераль маҡсатлы программаһы һәм дәүләт ярҙамы күрһәтеү буйынса республика программаһы буйынса бүленгән аҡсаларҙы файҙаланмаған. Торлаҡ сертификаттарын 2012 йылдың 24 июленә тиклем файҙаланырға, шулай уҡ ул торлаҡ программаһы буйынса отчеттарҙы ваҡытында тапшырырға кәрәк.

"Ауылды социаль үҫтереү" федераль маҡсатлы программаһы ла ауыл ерендә йәшәүсе йәш граждандарҙы арзан торлаҡ менән тәьмин итеүгә йүнәлдерелгән. Министрлыҡта әйтеүҙәренсә, уны тормошҡа ашырыу барышында төбәктә 4182 йәш белгес һәм йәш ғаилә үҙенең торлаҡ шарттарын яҡшыртҡан. Ике торлаҡ программаһы сиктәрендә 2011 йылда йәмғеһе 1759 йәш ғаиләгә дәүләт ярҙамы күрһәтелгән.

**Зөлфиә СИБӘҒӘТОВА әҙерләне.**

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓ Быйыл март айынан Дәүләт теркәүе, кадастр һәм картография федераль хеҙмәтенең (Росреестр) интернет-порталында (https://portal.rosreestr.ru) "Алдан яҙылыу" сервисы барлыҡҡа килде. Интернет-порталдың "Офистар һәм ҡабул итеүҙәр" бүлегенә инеп, күсемһеҙ милеккә хоҡуҡты теркәтеү һәм уның менән алыш-биреш итеү өсөн документтар тапшырыуға алдан яҙылырға була.

✓ Бөтә донъяға билдәле ғалим Әхмәтзәки Вәлидиҙең "Хәтирәләр" китабы Америка Ҡушма Штаттарында инглиз телендә донъя күрҙе. Ул Чарльстон ҡалаһында баҫтырылды һәм яҡынса 500 биттән тора. "Хәтирәләр"ҙе инглиз теленә Америка ғалимы Хасан Паксой тәржемә иткән. Сығышы менән ул төрөк. Әхмәтзәки Вәлидиҙең улы, Билькент университеты профессоры Сүбиҙәй Туған инглиз телендәге "Хәтирәләр"ҙең бер данаһын Башҡортостандың Әхмәтзәки Вәлиди исемендәге Милли китапханаһына тапшырған.

✓ Өфөлә ҡаланы таҙартыу һәм төҙөкләндереү айлығы иғлан ителде, ул 21 майға тиклем дауам итәсәк. Яҙғы өмәләр барлыҡ предприятие, учреждение һәм ойошмаларҙың, ҡала баҙарҙары һәм сауҙа комплекстарының территорияһында ойоштороласаҡ. Өфө хакимиәтенән хәбәр итеүҙәренсә, һәр территорияға өмә өсөн яуаплы кешеләр беркетелгән. Беренсе яҙғы дөйөм ҡала өмәһе Өфөлә 21 апрелгә билдәләнгән.

✓ Ишембайҙа Рәсәй Халыҡ-ара шашка федерацияһының отчет-һайлау конференцияһы үтте. Конференция эшендә илдең 11 төбәгенән вәкилдәр ҡатнашты. Халыҡ-ара шашка буйынса биш тапҡыр донъя чемпионы, халыҡ-ара гроссмейстер, Башҡортостан Республикаһы шашка федерацияһы рәйесе, төбәктең Йәмәғәт палатаһы ағзаһы Тамара Танһыҡҡужина Федерацияның яңы президенты итеп һайланды.

✓ 19 апрелдә Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театрында "Бәхет хаҡы" музыкаль мелодрамаһының премьераһы буласаҡ. Авторы - Хәлисә Мөҙәрисова, сәхнәгә театрҙың баш режиссеры Айрат Абушахманов ҡуя, рәссамы - Варвара Чувина (Санкт Петербург), йырҙар авторы - билдәле композитор Мөдәрис Ғәзетдинов, музыкаль яҡтан биҙәүсе - Илшат Яхин, балетмейстеры- Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Сулпан Асҡарова.

БАЛАЛАР ҠОЛАҒЫНА

# КЕҪӘ ТЕЛЕФОНЫ ЯРҘАМЫ...

## имтиханда кәрәкмәй



**Сығарылыш уҡыусылары өсөн ҡыҙыу мәл - Берҙәм дәүләт имтихандарын тапшырыу ваҡыты етеп килә. Быйыл БДИ-ның беренсе этабы 28 майҙан 21 июнгә тиклем үтәсәк. Был өлкәлә тағы ла түбәндәге яңылыҡтар бар.**

Яңы ҡағиҙәләр буйынса, имтихан билеттарын имтихан тапшырыусылар үҙҙәре, имтихандарҙы ойошторо-усылар (тап улар бланкыларҙы нисек тултырырға аңлата һәм тәртипте күҙәтә) һәм БДИ тапшырыу пункты етәксеһе генә күрә ала. 2012 йылдың 2 февраленән үҙ көсөнә ингән закон буйынса, имтихандарҙы тапшырыу тәртибен боҙған граждандарға 3 меңдән 5 меңгә тиклем, вазифалы кешеләргә - 25 меңдән 40 меңгә тиклем, юридик шәхестәргә 50 меңдән 200 меңгә тиклем штраф һалыу ҡаралған.

Былтырғы кеүек, имтихандарҙа йәмәғәт күҙәтеүселәре ҡатнаша аласаҡ, тик уларҙың һаны бер аудиторияға берәүҙән артмаҫҡа тейеш. Ата-әсәләргә, шулай уҡ уҡыусыларҙың башҡа туғандарына, быға тиклем хөкөм ителгәндәргә, психик тайпылыштары булғандарға күҙәтеүсе булараҡ ҡатнашыу хоҡуғы бирелмәйәсәк. Күҙәтеүсе булырға теләүсе имтиханға тиклем ике аҙна алдан Мәғариф министрлығына йәки урындағы мәғариф идаралығына ғариза бирергә тейеш. 2010 йылда 130 БДИ тапшырыу пунктында 684 кеше күҙәтеүсе булған, быйыл был һан 2600-гә етәсәк. Тап күҙәтеүсе БДИ тапшырыуҙың бөтөн ҡағиҙәләре дөрөҫ үтәлеүен контролдә тотасаҡ. Йәмәғәт күҙәтеүсеһенән тыш, һәр пунктта полиция хеҙмәткәре, табип ҡаралған.

БДИ тапшырыласаҡ бүлмәгә кеҫә телефоны, калькулятор һәм башҡа техник гаджеттар алып инергә ярамай. Икенсе яҡтан, бер кем дә уҡыусыны тикшереү хоҡуғына эйә түгел. Шуға ла уҡыусылар кеҫә телефоны менән ҡулланмаһын өсөн БР Хөкүмәте эргәһендә төҙөлгән ведомст-во-ара комиссияла төрлө саралар уйланыла. Мәҫәлән, кәрәҙле бәйләнеш өсөн тотҡарлыҡтар тыуҙырыла торған система ҡуйыласаҡ. БДИ тапшырыу урындарында металл эҙләү детекторы, ә имтихан тапшырыласаҡ кабинеттарҙа видеокамералар ҡуйылыуы көтөлә. Әгәр ҙә камералар ҡуйылһа, улар имтихан тапшырыу процесын яҙҙырасаҡ ҡына.

Быйыл да рус теле һәм математика мотлаҡ тапшырыласаҡ имтихандар булып ҡаласаҡ. Ҡалған фәндәр буйынса БДИ тапшырыуҙы уҡыусы үҙе хәл итә. БР Мәғариф министрлығының белем биреүҙең һәм БДИ-ның сифатын баһалау бүлеге етәксеһе Зәки Мырҙағәлин белдереүенсә, республикала йәмғиәтте өйрәнеү буйынса БДИ тапшырырға теләүселәр беренсе урында тора - 15475 кеше. Икенсе урында физика, был фән буйынса 11424 уҡыусы имтихан тапшырасаҡ, ә өсөнсө урынды биләүсе биологиянан 6907 уҡыусы "үҙ бәхетен" һынаясаҡ.

Әйткәндәй, быйыл Башҡортостанда бөтәһе 27556 кеше БДИ тапшырасаҡ. Уларҙың 93 проценты - 25748 кеше быйыл мәктәпте тамамлай, ҡалған 111 кеше былтырғы уҡыу йылында имтихан тапшыра алмаусылар, техникум һәм колледжды тамамлаусылар.

20 апрелдән алдан БДИ тапшырыу хоҡуғына эйә булыусылар имтихан тапшыра башлаясаҡ. Әлегә тиклем 17 кеше алдан имтихан тапшырыу теләген белдергән. Уларға быйыл өсөн ике аҙна ваҡыт биреләсәк. Был төркөмгә нигеҙле сәбәптәр арҡаһында май һәм июнь айҙарында имтиханда ҡатнаша алмаусылар инә:

- имтихандар ваҡытында Бөтөн Рәсәй һәм Халыҡ-ара олимпиадаларҙа ҡатнашыусы сығарылыш уҡыусылары;
- был осорға медицина операциялары йәки һаулыҡ торошо буйынса дауалау-профилактика саралары планлаштырылған сығарылыш уҡыусылары;
- имтихандар осоронда Бөтөн Рәсәй һәм Халыҡ-ара ярыштарҙа ҡатнашыусы спортсылар.

*Ләйсән ДАЯНОВА әҙерләне.*

*Аһ-Аһ!*

# НИҢӘ АРТА,

## кем ғәйепле?

**ВИЧ кеүек ҡурҡыныс инфекцион ауырыуҙарҙы иҫкәртеү һәм улар менән көрәш прблемаһы киҫкенлеген юғалтмай. Бигерәк тә баш ҡалабыҙҙа хәл ҡырҡыу тора.**

Ошо мәсьәлә буйынса Өфө ҡала округы хакимиәтендә уҙғарылған кәңәшмә ултырышында әйтеүҙәренсә, ВИЧ менән сирләүселәр баш ҡалала 2006 йылға ҡарағанда 2 тапҡырға артҡан. Бөгөн уларҙың һаны - өс меңдән ашыу. Ә республика буйынса иҫәптә 9 мең ауырыу тора. Иң күп сирләүселәр Өфөнөң Калинин, Дим, Ленин райондарында теркәлгән. Ауырыу йоҡтор-ғандарҙың яртыһынан күбеһе - наркотик ҡулланыусылар.

ВИЧ менән ауырыусылар даими рәүештә дауаханала күренеп, тикшеренеү үтеп торорға, кемдәр менән йәшәүен, аралашыуын ваҡытында хәбәр итергә тейеш. Күрәләтә ауырыу йоҡтороусыға иһә закон буйынса енәйәт эше ҡуҙғатыла. Әммә кәңәшмәлә сығыш яһаусы медицина хеҙмәткәрҙәре билдәләүенсә, сирле наркомандарҙы контролдә тотоуы бик ауыр. Уларға бәйле мәғлүмәттәрҙең дөрөҫмө, юҡмы икәне шик тыуҙыра. Бәйләнешкә ингән осраҡта иһә медицина хеҙмәткәренең гүмере хәүеф аҫтында ҡала. Кәңәшмәлә хоҡуҡ һаҡлау органдары менән тығыҙ бәйләнештә эшләү етмәй, тип билдәләнде. Шулай уҡ ВИЧ-инфекцияға тикшеренеү үтеүселәрҙә йәлеп итеү даирәһе тар. Ғәҙәттә, социаль яҡтан имен булмағандар, бер ҡайҙа ла уҡымай, эшләмәй йөрөгәндәр тикшерелмәй. Шуға күрә сирҙең сығанағы ла күп осраҡта асыҡланмай ҡала. Шулай уҡ ни өсөн тыныс һаналған Дим районында сирләүселәр күп, тигән һорау тыуа. Башҡа райондарҙа статистик мәғлүмәттәр дөрөҫкә тап килмәҫкә лә мөмкин. Әммә тап Дим районында наркоманлыҡтың йылдан-йыл тамыр йәйә барыуы күҙәтелә.

Наркомандарҙың артыуына Өфө аптекаларында дезоморфиндың иркен һатылыуы йоғонто яһай. Ҡала буйынса был препаратты һатыуҙы тыйырға кәрәк, тигән тәҡдим яңғыраны кәңәшмәлә. Күрше өлкәләрҙә иһә дезоморфинды һатыуға сығарылыу бер нисә йыл элек үк тыйғандар. СПИД һәм йоғошло сирҙәрҙә киҫәтеү һәм улар менән көрәшеү буйынса республика үҙәге бар. Баш ҡала буйынса уның филиалын асыу кәрәклеге лә һыҙыҡ өҫтөнә алынды.

*Мәһәҙи МОРАТОВ.*

ҺОРАУ - ЯУАП

## МИРАҪСЫ ХОҠУҒЫМ

**Мираҫсы буларaҡ, атайымдың фатирына дәғүә итәм. Мираҫҡа эйә булыу хоҡуғына документтар йүнәтә башлағайным, шул асыҡланды: атайым вафат булғас, фатир ышаныс ҡағыҙы буйынса һатып ебәрелгән. Был фатирға дәғүә итә һәм уны үҙемдең исемгә ҡайтара аламмы?**

- Атайығыҙҙың фатирын һатыу буйынса килешмә законға ярашлы түгел, сөнки ул мираҫ ҡалдырыусы үлгәндән һуң уның элек биргән ышаныс ҡағыҙы буйынса башҡарылған. РФ Гражданлыҡ кодексының 188-се статьяһы буйынса, мираҫ ҡалдырыусының вафатынан һуң ышаныс ҡағыҙы ғәмәлдән сыға. Тәү сираттағы мираҫсы булараҡ, атайығыҙҙың фатирын һатыу-һатып алыу буйынса килешмәнең законһыҙлығын таныу тураһында юллау менән судҡа мөрәжәғәт итергә хаҡлыһығыҙ. Фатирҙы һатыу-һатып алыу килешеүе төҙөлгән ваҡытҡа фатир милексеһенең хоҡуҡи вәкәләттәре, шулай уҡ ышаныс ҡағыҙы буйынса фатирҙы һатҡан кешенең вәкәләттәре туҡтатылған.

## КҮРШЕ ХАҠЫ

**Баҡса участкамда йорт һалдым. Иғтибар итмәгәнмен, төҙөүселәр күрше участка сигенән тейешле булғанса 3 түгел, ә 2,5 метр ара ҡалдырған. Хәҙер күрше шуның өсөн мине судҡа биреп, йортомдо тейешле араlыҡҡа шылдырып яңынан һалыуҙы талап итә. Суд быңдай талапты ҡәнәғәтләндереүе ихтималмы?**

- Суд тарафынан күршегеҙҙең хоҡуҡтары ни кимәлдә боҙолоуын асыҡлау өсөн төҙөлөш-техник экспертиза үткәрелеүе ихтимал. Әгәр экспертиза тарафынан күршегеҙҙең хоҡуҡтары боҙолмауы асыҡланһа, йортоғоҙҙоң төҙөлөш нормаларынан бик аҙға ғына ситләшеүенән бер кемгә лә зыян юҡ.

## ТОРЛАҠ ИНСПЕКЦИЯҺЫ ВӘКӘЛӘТЛЕГЕ

**"РФ Торлаҡ кодексына үҙгәрештәр индереү һәм Рәсәй Федерацияһының айырым закон акттары тураһында" Федераль закон көсөнә инде. Шуның ҡайһы бер мөһим положениелары менән таныштырып үтһәгеҙ ине?**

- Иң тәүҙә торлаҡ инспекцияларының вәкәләтлеге киңәйтелеүен билдәләп китеү кәрәк. Хәҙер улар Торлаҡ милексeләре ипшәлеге (артабан - ТСЖ) һәм Идара итеүсе компаниялар (артабан - УК) ойоштороуҙың, уставтарын, етәкселәрен һайлауҙың законлылығын тикшерергә хоҡуҡлы. Урындарҙағы үҙидаралыҡ органдары торлаҡ милекселәре,йорт советы рәйесе, ТСЖ идаралығы органдары мөрәжәғәттәре нигеҙендә идара итеүсе ойошмалар эшмәкәрлегенә тикшереү ойоштора ала. Закон боҙоу осраҡтары асыҡланған хәлдә идара итеү компаниялары менән килешеүҙе өҙөп, яңыны һайлай йәки йорт менән идара итеү ысулын үҙгәртеү тураһындағы мәсьәләне хәл итә. УК эшмәкәрлеген контролдә тотоусы йорт советы төҙөү мөмкинлеге барлыҡҡа килде.

## ИПОТЕКА - ШӘХСИ ЭШ

**Эшемдә ҡыҫҡартыуға эләгәм, ә бит мин ипотека түләйем. Ошоға бәйле мине эштә ҡалдырыуҙары ихтималмы?**

Юҡ. Ипотека - һеҙҙең шәхси мәсьәлә булып тора. Үкенескә күрә, ул штат берәмектәрен ҡыҫҡартыу шарттарында эштә ҡалдырыу өсөн өҫтөнлөклө хоҡуҡ менән файҙаланыу мөмкинлеге бирә алмай.

Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы

# ЭСКЕЛЕКТӘН ЯФАЛАНҒАНДАРҒА



**Һарыгүҙ (золототысячник) үләне төнәтмәһе:** 2 ҡалаҡ киптерелгән үләнгә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 10 минут ҡайнатырға һәм 2 сәғәт төнәтергә. Һөҙөргә, стакандың өстән бер өлөшө күләмендә көнөнә 3 тапҡыр эсергә.

**Ҡанүлән (тимъян) - 80 грамм, әрем - 20 грамм:** ошо үләндәрҙе бергә бутарға һәм 2 ҡалаҡ үләнгә 0,5 литр ҡайнар һыу ҡойорға, ҡайнау хәленә еткерергә һәм һүрән утта 10 минут ҡайнатырға. Һуңынан бер сәғәт төнәтергә, һөҙөргә, стакандың өстән бер өлөшө күләмендә көнөнә 3 тапҡыр эсергә. Дауаланыу курсы - 1 ай. Бер ай ял иткәндән һуң тағы ҡабатларға.

**20 грамм ҡуҙаҡлы ҡыҙыл боросто** 0,5 литр 60 процентлы спиртҡа һалырға, 2 аҙна төнәтергә, ваҡыты менән болғатып торорға. Һөҙөргә. 0,5 литр шарапҡа 2-3 тамсы өҫтәргә. Эсеүгә булған теләкте кәмetә.

**Һарыгүҙ - 1 өлөш, әсе әрем - 1 өлөш, кейәү үләне (чабрец) - 1 өлөш:** 15 грамм ошо ҡатнашмаға 200 мл ҡайнар һыу ҡойорға, сепрәккә урап, 2 сәғәт төнәтергә, һөҙөргә. Көнөнә 4 тапҡыр берәр ҡалаҡлап эсергә.

**Урман ҡандалаһын** тоторға, ул йәшел төҫтә була, еҫе үтә зәһәр. Ғәҙәттә, ҡурай еләгендә йышыраҡ осрай. Ошо ҡандаланы араҡыға һалып төнәтергә. Алкоголизмдан яфаланған кешегә эсерергә, үҙе был турала белмәһен. Был "төнәтмә" спиртлы эсемлеккә ерәнеү тыуҙыра.

**4 ҡалаҡ һары мәтрүшкәгә** 0,5 литр ҡайнар һыу ҡойоғоҙ. Ҡайнап ултырған һыуҙа 25-30 минут тоторға. Һыуытылған һәм һөҙөлгән төнәтмәне иртәнге һәм төшкө аш алдынан 2-шәр ҡалаҡлап эсергә. Дауаланыу курсы 10-15 көн. Ауырыған кеше даими рәүештә был төнәтмәне ҡабул итһә, алкоголгә әйләнеп тә ҡарамаҫ.

**Йылға ҡыҫалаһын** тотоп, бешереп, уларҙың ҡабырсағын алып, ҡәһүә онтағыста порошок хәленә килтерергә. 2 балғалаҡ ошо порошокты эсергә ярайтусының ризығына ҡушырға. Бер юлы араҡы тәҡдим итеп ҡарағыҙ, был "дауа" шунда уҡ үҙенең тәьҫирен күрһәтер. Бер нисә тапҡыр ҡабатларға.

*Марат ИШМӨХӘМӘТОВ.*

*✓ Элек көслө заттарыбыҙ конкурста бик аҙ ҡатнаша торғайны. Быйыл улар күберәк булды, өҫтәүенә, еңеүселәрҙең өсәүһе - ир-егет за. Мәктәптәрҙә көслө һәм гүзәл заттарҙың нисбәтен һаҡлау - ул бик мөһим мәсьәлә.*



ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

(Башы 1-се биттә).

## Сәмле лә, ғәмле лә

Өс турҙан торған ярыштың этаптары ла тәү сиратта педагогтың оҫталыҡ кимәлен асып, унан башҡалар ҡыҙыҡһынырлыҡ яңы һүҙ, фекер ишеттереүгә ҡоролғайны. "Инновацион проект менән уртаҡлашыу", "Оҫталыҡ дәрестәре", асыҡ лекция уҡыу, "Әңгәмә-бәхәс" конкурстары ошо хаҡта һөйләй. Ҡатнашыусылар араһында конкурсҡа икенсе тапҡыр килеүселәр байтаҡ ине. Был да ярыштың кимәлен күтәреүгә булышлыҡ иткәндер. Асыҡ лекциялар "Был донъяға минән ни ҡалыр?" тигән актуаль, шул уҡ ваҡытта фәлсәфәүи темаға арналды. Педагогтар үҙ сығыштарында халҡыбыҙҙың көнүҙәк проблемаларын - тел, тәбиғәт мәсьәләләрен күтәрҙе. Бер нисә проблеманы бер-береһенә бәйләп асып биреүселәр күп булды. Оҫталыҡ дәрестәрендә уҡытыусы дәрестең бер өлөшөн генә күрһәтеп, 20 минут эсендә үҙенең белем биреү алымдары менән таныштырырға тейеш ине. Халыҡ ижадына таянған дәрестәр отошло булды, тип билдәләне тамашасылар. Мәҫәлән, Шаран районынан килгән уҡытыусы Зилиә Диярова аттар темаһын һайлап, ат исемдәре менән таныштырыуҙың үҙенсәлекле ысулдарын, ат менән бәйле күп эш төрҙәрен күрһәтте. Рәми Ғарипов исемендәге гимназия уҡытыусыһы Рәсимә Алламоратова "Урал батыр" эпосы темаһын алып, мәшһүр әҫәрҙең мәктәптәрҙә әле бигүк өйрәнелмәгән генетика, космогония йүнәлештәрен асып күрһәтергә ынтылды. Ишембай районынан Рифат Әйүповтың дәресе тыныш билдәләрен өйрәнеүгә арналды. Балалар инша, изложение яҙған ваҡытта бигерәк тә "ике нөктә", "һыҙыҡ" билдәләрен ҡуйыуҙа бутала, хата ебәрә. Педагог был йәһәттән ҡағиҙәләрҙе үҙ алымдары менән аңлатып, уларҙың һөҙөмтәле булыуын дәлилләне. Инновацион проект менән таныштырыу эшен дә ҡатнашыусылар ижади башҡарҙы. Элекке конкурстар менән яҡшы таныш булған тәжрибәле уҡытыусы Рәйсә Мөхәмәтова: "Хәҙер яңы технологиялар етерлек. Әммә һәр уҡытыусының үҙенең генә ятҡан, йыш файҙаланған алымы була. Ошо ярышта ҡатнашыусылар тап көнөгә ятҡан технологияларҙы күрһәтергә ынтылды. Элегерәк бәғзе уҡытыусылар үҙ эшендә ҡулланмаған, конкурс өсөн генә әҙерләгән алымдарын күрһәтә ине. Хәҙер конкурстың был өлөшөнә аңлы рәүештә, үҙ эш һөҙөмтәләрен сағылдырырлыҡ итеп ҡарайҙар", - тине.

## Күршеләрҙең хәле нисек?

Күрше өлкәләрҙән килгән педагогтарыбыҙға айырыуса ҙур иғтибар бүленде. Республиканан ситтә йәшәүсе милләттәштәребеҙгә үҙ телен һаҡлауы ни тиклем ауырға тура килеүе бер кемгә лә сер түгел. Унда башҡорт ауылдары йылдан-йыл кәмей, башҡорттар күпләп йәшәгән урындарҙа ла туған телебеҙ уҡытылмай. Шуға ҡарамаҫтан, урындағы уҡытыусыларыбыҙ телде һаҡлап ҡалыуға бар көсөн һала. Уларҙы конкурсҡа саҡырыу - үҙенә күрә бер рухи ярҙам да, хеҙмәттәренә хөрмәт белдереү, баһа биреү ҙә. Мәрүәр Дәүләтова - Ырымбур өлкәһенән. Красногвардейский районында урынлашҡан Үрге Ильяс ауылының Мөхәмәтша Буранғолов исемендәге төп белем биреү мәктәбендә дәрестәр алып бара. Ырымбурҙа телебеҙҙең бөгөнгө хәле, киләсәге хаҡында бик борсолоп һөйләй Мәрүәр Әмир ҡыҙы: "Уҡытыуы ҡыйынға тура килә, сөнки телде белеүселәр беҙҙә бик һирәк ҡалған. Бигерәк тә ата-әсәләрҙең гел русса һөйләшеүе эсте бошора, - ти ул. - Балаларына тыуғандан алып сынок, дочка тип кенә өндәшәләр. Ауылда тик башҡорттар йәшәһә лә, башҡорт теле яңғырамай тиерлек. Айырыуса һуңғы йылдарҙа был нык һиҙелә. Өлкә буйынса элек 13 мәктәптә башҡорт теле уҡытыла ине, хәҙер дүртәүһендә генә ҡалдырылған. Уларында ла берешәр-икешәр дәрес кенә. Беҙҙең мәктәптә аҙнаһына әлегә өс дәрес. Әгәр ҙә хәл үҙгәрмәһә, тиҫтә йылдан Ырымбурҙа башҡорттар бөтөнләй юҡҡа сығасаҡ, тигән ҡурҡыу бар миндә". Мәрүәр Дәүләтова үҙе сығышы менән Александровка районы Кәнсер ауылынан. Юғары белемде Стәрлетамаҡ ҡалаһында үҙләштергән. Беҙ үҫкәндә, туған телде өйрәнеүселәр күп ине, уҡытыусыларыбыҙ ҙа көслө булды, ти. Башҡорт теленең бөтөүе унда бәләкәй ауылдарҙағы мәктәптәрҙе ябыуға ла бәйле. Әммә ғаиләләрҙә телдең ҡулланылмауы төп сәбәп булып тора.

Силәбе өлкәһендә хәл яҡшыраҡ. Арғаяшта башҡорт теле дәрестәрен һаҡларға тырышалар. Һуңғы ваҡытта Ҡоншаҡ районында ла ыңғай үҙгәрештәр күҙәтелә. Бүре ауылының урта мәктәбендә белем биреүсе Ләйсән Әбдрәхимова әйтеүенсә, районда 20-гә яҡын мәктәптә башҡорт теле өйрәнелә. Әммә улар төрлө формала, шул иҫәптән факультатив рәүешендә алып барыла. Бүре мәктәбендә лә аҙнаһына бер дәрес, бер факультатив сәғәте индерелгән. "Элек башҡорттар ғына йәшәгән ауылдарҙа ла туған тел дәрестәре бөтөрөлөп ҡуйылғайны. Районға яңы етәксе килеү менән дәрестәр яйлап яңынан тергеҙелә башланы. Яңы башлығыбыҙ милләте буйынса - башҡорт, һәр бала үҙ телен белергә тейеш, тигән ҡараштан сығып эш итә. Ата-әсәләр ҙә дәрестәрҙе яңынан тергеҙеү өсөн күтәрелеп сыҡҡайны. Беҙҙә шуныһы яҡшы - ата-әсәләр үҙ-ара ла, балалары менән дә башҡортса һөйләшәләр. Минең бурыс иһә - ерле һөйләштә телде уҡытыу методикаһына таянып, балаларҙы әҙәби телгә өйрәтеү", - тине Л. Әбдрәхимова.

**Конкурсты ябыу тантанаһы Милли йәштәр театрында уҙҙы. Уның һөҙөмтәһе буйынса төрлө номинацияларҙа еңеүселәр билдәләнде. "Киске Өфө" гәзите лә уҡытыусыларҙы дәртләндереүгә үҙ өлөшөн индерҙе һәм 17 уҡытыусыға маҡтау ҡағыҙҙары, иҫтәлекле бүләктәр тапшырҙы. Финалға иһә биш педагог - Баймаҡ лицей-интернаты уҡытыусыһы Сафа Ишҡыуатов, Әбйәлил районы Хәлил ауылы мәктәбе уҡытыусыһы Радик Өмөтҡужин, Ишембай ҡалаһы мәктәбе директоры һәм уҡытыусыһы Рифат Әйүпов, Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернаты уҡытыусыһы, филология фәндәре кандидаты Рәсимә Алламоратова, Стәрлетамаҡ районы Оло Ҡоғанаҡ ауылы мәктәбе уҡытыусыһы, Башҡортостандың мәғариф алдынғыһы Әклимә Ибәтуллина сыҡты. Конкурстың еңеүсеһе һәм гран-при алыусыһы - Рифат Әйүпов.**

# ИР-АТ БИРГӘН ҺАБАҠТАН...

## ир ҙә, ил дә үҫер


Финалға сығыусылар.

*ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП*

**Ғиниәт ҠУНАФИН, жюри рәйесе:** Быйылғы конкурс элекке йылдарҙағыларынан айырылып тора, тигән фекер яңғырауыраҡ булһа ла, ул һүҙҙәрҙә хаҡлыҡ бар. Сөнки ярыш шарттарын йылдан-йыл камиллаштырырға, уҡытыусылар үҙҙәренең ижади мөмкинлектәрен, зиһен, рух көсөн, балаларға, йәштәргә булған мөнәсәбәттәрен асып күрһәтерлек юлдар һайларға тырышабыҙ. Яңы технологияларҙы ҡулланып эш итеү йәһәтенән ыңғай күренештәр күп булды. Әммә бының икенсе яғы ла бар. Яңы технологиялар тип, традицион алымдарыбыҙҙы, халыҡ педагогикаһын онотоп ебәрмәһәк ине. Быуаттар төпкөлөнән килгән тамырҙарыбыҙҙы хәстәрләйбеҙ тиһәк, тап үҙ алымдарыбыҙҙы онотorға ярамай. Шуға ла яңы технологиялар менән үтә мауығып китеүҙән һаҡланырға кәрәк. Билдәле бер нисбәт булырға тейеш. "Визитка" конкурсында, мәҫәлән, үҙе менән таныштырыуын алдан видеоға төшөрөп, ә сығыш яһағанда экран янында ғына торған уҡытыусылар булды. Был осраҡта уҡытыусының сәсәнлек һәләтен дә, импровизаторлығын, ораторлығын да, күңел торошон да күрә алмайбыҙ бит. Әгәр ҙә уҡытыусы экранда төшөрөлгәндә үҙ комментарийҙары менән оҙатып барһа, сығыш бөтөнләй башҡа төрлө күренер ине. Элек көслө заттарыбыҙ конкурста бик аҙ ҡатнаша торғайны. Быйыл улар уҙған йылға ҡарағанда ла күберәк булды, өҫтәүенә, еңеүселәрҙең өсәүһе - ир-егет. Мәктәптәрҙә көслө һәм гүзәл заттарҙың нисбәтен һаҡлау - ул бик мөһим социаль, хатта сәйәси мәсьәлә. Сөнки баланы ҡатын-ҡыҙ психологияһы менән генә тәрбиәләп булмай. Ир балаларҙы киләсәктә атай тойғоло, ил тотҡаһы, ғаилә башлығы итеп күрергә теләһәк, мотлаҡ уҡытыусылар сафына ир- аттарҙы йәлеп итергә кәрәк. Шуға күрә ҡатнашыусылар араһында тәрән уйлы, масштаблы фекер йөрөткән ир заттар булыуы беҙҙең өсөн ҡыуаныслы хәл.

**Фәнзил САНЪЯРОВ, жюри ағзаһы:** Конкурсты бик ҡыҙыҡһынып күҙәттем. Сөнки үҙемә заманында республикала, Рәсәй кимәлендә "Йыл уҡытыусыһы" конкурсы еңеүсеһе булырға тура килде. Шуға күрә һәр ҡатнашыусының тулҡынланыуы, сәме йөрәгем аша үтте. Быйыл бик көслө уҡытыусылар ҡатнашты. Айырыуса ир-егеттәребеҙ үҙ оҫталығын юғары кимәлдә күрһәтте. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, мәктәптәрҙә ир уҙамандар бик аҙ. Шуның арҡаһында тәрбиә өлкәһендә бик күп ҡиммәттәрҙе юғалтабыҙ. Ҡыйыу, үҙ фекерен әйтә алырлыҡ егеттәр урынына, йомшаҡ, баҫалҡы, ҡыҙ характерлы ир заттарын үҫтерәбеҙ. Күп кенә әсәләр, минең улым ҡыҙҙар кеүек, шул тиклем тәртипле, тыйнаҡ, тиҙәр. Был, киреһенсә, аяныс. Егет кеше ҡыҙҙар кеүек баҫалҡы, һүҙ әйтергә лә ҡыймай торған кеше булырға тейеш түгел. Республиканы һаҡлайыҡ, үҫтерәйек, тиһәк, сая ирҙәр тәрбиәләргә бурыслыбыҙ. Шуға күрә конкурста егеттәрҙең ҡатнашыуы, еңеп сығыуҙары өсөн ифрат шатмын.

**Рифат ӘЙҮПОВ, конкурс еңеүсеһе:** Конкурста икенсе тапҡыр ҡатнашам. Тәүгеһендә лә лауреат исемен алғайным. Әммә быға тиклем лауреаттарҙың ҡабаттан ҡатнашыу хоҡуғы булмағайны. Быйыл конкурс положениеһын бер аҙ үҙгәрттеләр. Мөмкинлек тыуғас, үҙ теләгемде белдерҙем. Әммә конкурс еңеүсене билдәләү түгел ул, ә фәһем алыу, тәжрибә туплау, булған оҫталығыңды башҡалар менән уртаҡлашыу майҙаны. Был йәһәттән үҙ тәҡдимемде лә еткергем килә. Ошо конкурс еңеүселәренән бер төркөм туплап, уларҙың тәжрибәһен башҡа уҡытыусыларға ла еткереү юлдарын эҙләргә кәрәк ине. Сөнки алдынғы уҡытыусыны беҙ конкурста ғына күрәбеҙ, аҙаҡтан уның эшмәкәрлеге менән танышыу мөмкинлеге юҡ. Үҙ мәктәбендә ул эшләй, ә республика кимәлендә юғалып ҡала. Ундай уҡытыусыларҙы Мәғарифты үҫтереү институты үткәргән курстарҙа ҡатнаштырырға була, мәҫәлән. Ул ваҡытта педагог еңеү яулау менән генә туҡталып ҡалмай, артабан да үҙ өҫтөндә эшләү яуаплылығын тоя. Үҙем 2004 йылдан бирле милли мәктәптәрҙә башҡорт телен уҡытыу методикаһы өҫтөндә эшләйем. Һуңғы осорҙа сит илдән килгән уҡытыу алымдарына ғына өҫтөнлөк биреп эшләү күренеше һиҙелә. Ә бит башҡорт ғалимдарының методикалары уларҙан кәм түгел. Ғөмүмән, совет осоро алымдары дөрөҫ ҡулланылған, тип иҫәпләйем. Үҙ алымдарыбыҙҙың төп билдәһе - күргәҙмәлелек. Компьютер ул күргәҙмәлелекте тағы яңы баҫҡысҡа күтәрҙе. Дәресемдә бер генә методиканы түгел, ә төрлө методикаларҙың элементтарын ҡатнаштырып ҡулланырға тырышам. Тел дәресендә әҙәбиәт программаһына ингән материалдарҙы файҙаланам. Һөҙөмтәлә уҡыусы әҙәби әҫәрҙе бер нисә ҡат ҡабатлап сыға. Милли мәктәптәрҙә һөйләү телмәре менән яҙма телмәрҙе үҙләштереүгә бер тигеҙ ваҡыт бүлеү яғындамын, сөнки яҙма телде лә хатаһыҙ ҡулланырға өйрәнеү, йәғни башҡортса дөрөҫ яҙа белеү ҙә үтә мөһим. Бөтә мәҙәниәтебеҙ яҙма тел аша үҫә бит.

**Радик ӨМӨТҠУЖИН, конкурс финалисы:** Беҙҙең мәктәптәрҙә электән килгән "мәжбүр итеү" педагогикаһы урын алған. Әйтәйек, хеҙмәт дәресендә балаға әҙер һыҙма бирелә, уҡыусы шул һыҙмаға ҡарап ҡына ултырғыс эшләргә тейеш. Был конкурста мин ижади проектлау алымын күрһәттем. Ул баланың һәләтенә ҡарап эшләүгә ҡорола. Был осраҡта уҡыусыға әҙер һыҙма бирмәйһең, ул үҙе уйларға, үҙ һәләтенән сығып эш итергә тейеш. Уҡытыусы консультантҡа ғына әйләнә. Баланан ул талап итмәй, ә уның менән бергә эшләй. Минең һымаҡ эшлә, тип әйтеү дөрөҫ түгел, сөнки һәр баланың үҙ мәктәбе бар. Ана шул мәктәпте табырға, асырға кәрәк. Хәҙер балаға дәрестәрҙә донъяуи белем биреүҙең әһәмиәте арта. Программа сиктәрендә генә уҡыусыға нимәлер биреп булмай. Бер дәрестә бер юлы бер нисә фән буйынса белем биреү аша донъяуи белемгә төшөндөрөргә кәрәк. Әҙәбиәт дәресендә әҫәргә ниндәйҙер теоретик анализ биреүҙән бигерәк, уны тормош менән бәйләп ҡарау мөһим. Китап уҡыу ҙа үҙенә күрә бер ижад эшенә әйләнергә тейештер. Мин үҙем, мәҫәлән, китапты бер тынала уҡымайым. Бер аҙ уҡып, артабан ни булыр икән, тип уйланып йөрөйөм, фараздар ҡорам, әҫәрҙәге образдар менән йәшәйем. Был үҙе белем сығанағы булып тора.

**Мөнир ИҠСАНОВ.**

*ТАРИХ ЯРСЫҠТАРЫ*

**Тарихсылар Салауат Хәмиҙуллин менән Рөстәм Таймаҫовтың тикшеренеүҙәре Башҡортостан тарихының иң ауыр осорона арнала. Авторҙар Башҡорт АССР-ының мөһим мәсьәләләренең береһен - Кесе Башҡортостан менән ҡушылыу һөҙөмтәһендә Өфө губернаһы бөтөрөлөп, "Оло Башҡортостан" төҙөлөүен тикшерә. 1918 йылдың февралендә Өфө губернаһы крәҫтиәндәренең Башҡорт республикаһына ҡушылыу хәрәкәтенә нигеҙ һалған Борай Башҡорт автономиялы районын иғлан итеүгә ҡағылышлы ваҡиғаларҙы тергеҙеү - авторҙарҙың тарих фәнендәге ҡаҙанышы булып тора.**

# БОРАЙ ҠАНТОНЫ



Бөтөн Башҡорт ойоштороу ҡоролтайында Башҡортостандың административ ҡоролошо проекты 9 административ берәмек - кантондар ойоштороуҙы күҙаллай. 1918 йылдың февралендә - Ырымбурҙа Башҡорт хөкүмәтен ҡулға алған мәлдә Өфө губернаһы территорияһында 10-сы, бер кем дә планлаштырмаған Борай кантоны иғлан ителеүе барыһын да, тәү сиратта, губерна властарын таң ҡалдыра.

Борай ауылы үҙенә нигеҙ һалған "башҡорт Борай" исемен атама итеп ала. 1707 йылда Муса Йәшбулатов менән Якушка Исаев шулай тип яҙа: "Уларҙың олатаһы, башҡорт Борай Танып йылғаһы буйында аҫаба ерҙәргә эйә булған һәм ҡортсолоҡ менән шөғөлләнгән, Өфө өйәҙенән Ҡаҙан өйәҙенә күсенгән һәм шунда вафат булған..." Борай нәҫеленең бер өлөшө суҡына, был турала уларҙың исемдәре асыҡ һөйләй - Якушка Исаев, Матюшка һәм Ивашка Степановтар. Был, моғайын, XVII быуаттың 80-се йылдарында уҙғарылған көсләп христианлаштырыуҙың әүҙемләшеүе һөҙөмтәһе булғандыр. Батша хөкүмәтенең бик популяр булмаған дини сәйәсәтенә башҡорттарҙың реакцияһы 1681-1683 йылдарҙағы ихтилал аша сағыла. Артабан 1704-1711 йылдарҙа тағы ла дәһшәтле башҡорт хәрәкәте баш күтәрә һәм ул баш ҡалаһы Ҡаҙанда булған сынғыҙиттәр ханлығын тергеҙеү байрағы аҫтында бара. Башҡорттарҙың сираттағы ихтилалы туҡтауға, батша сәйәсәте менән риза булмаған мендәрсә татар үҙҙәре өсөн үҙенсәлекле Шервуд урманы булып торған Башҡортостанға күсенә. Күскенселәр араһында Борайҙың бүләсәрҙәре лә була. Улар ата-олатайҙарының еренә ҡайтып, аҫаба ерҙәрен кире ҡайтарыуҙарын һорай. Уларҙы Елдәк олоҫонда ҡолас йәйеп ҡаршылайҙар: аҫаба тип таныйҙар һәм ата-олатайҙарының еренә хужа итәләр. XX быуатта Борай ауылы Башҡортостан автономияһы өсөн көрәш үҙәгенең береһенә әүерелә.

Өфө губернаһы башҡорттары араһында сыуалыш 1917 йылға тиклем үк башлана. Бына, билдәһеҙ архивсы тарафынан төҙөлгән бер нисә мәғлүмәт:

**1906 йыл:**

- февраль: Балтас олоҫонон Тимкә ауылы башҡорттары Новотроицк ауылы эргәһендә үҙҙәренән тартып алынған урманды ҡырҡа. Урман ҡарауылсыһын туҡмайҙар һәм ҡоралын тартып алалар.

- июнь: Балыҡсы олоҫо башҡорттары фетнәһе; Шәфиев кисеүе эргәһендә 150 кеше йыйыла. 25 атлы полицейский саҡыртыла.

- июль: Әсән олоҫонон Мәскәү һәм Учпили ауылдарында 600 башҡорт йыйылыш үткәрә.

**1907 йыл:**

- 6 ғинуар: Борайҙа башҡорттар төркөмө полицияға, приставтың фатирына һөжүм итә. Бер башҡорт үлә.

- июнь: Минзәлә өйәҙендә полицияға аталар.

-июль: Бөрө өйәҙе башҡорттары Дәүләт Думаһында аҙ һанлы халыҡтар вәкилдәре аҙыраҡ вәкәләттәргә эйә булыуы менән ҡәнәғәтһеҙлек белдерә һәм, әгәр Дума быға иғтибар итмәһә, үҙ хоҡуҡтарын көс ҡулланып яҡлаясаҡтарын белдерә.

Ошо яҙылғандарҙан сығып фекер йөрөткәндә, Башҡорт автономияһы өсөн хәрәкәт башланғас та Бөрө өйәҙе крәҫтиәндәренең тәүгеләрҙән булып Бөтөн Башҡорт ойоштороу ҡоролтайы ҡарарҙарын тормошҡа ашыра башлауына аптырайһы түгел. 1918 йылдың 18 апрелендә, йәғни Ырымбурҙа Башҡорт хөкүмәтен ҡулға алғандан һуң, Борай ауылында Башҡорт республикаһына ҡушылыу өсөн хәрәкәт аныҡ сәйәси форма ала, массаларҙың үҙ ихтыярын белдереүе осрағын тыуҙыра һәм башҡаларға эш башларға сигнал бирә: Борай Башҡорт милли советы (Шураһы) үҙенең һәм күрше ете олоҫтоң территорияһын Борай кантоны хоҡуғында Башҡорт республикаһы ("Кесе Башҡортостан") составына ингән Борай башҡорт автономиялы районы тип иғлан итә. Үҙ-үҙен иғлан иткән кантон һәр яҡтан Өфө губернаһы менән уратып алынған анклавты хәтерләтһә лә, был борайҙарҙы һис тә аптыратмай, улар эшкә тәүәккәл тотона. Уларҙың эшмәкәрлегенең йәшерен мәлдәрен табыу өсөн Өфө крайындағы социаль-иҡтисади хәл-торошҡа байҡау яһарға кәрәк.

Илдә граждандар һуғышы бара. Пролетариат диктатураһына икмәк кәрәк. Шуға күрә большевиктар аҙыҡ-түлек развёрсткаһын, йәғни крәҫтиәндән уның хеҙмәт емешен тартып алыуҙы, индерә. Уларҙың үҙҙәренә йән аҫырарлыҡ минимум ғына ҡалдырыла, ҡалған иген тартып алына. Губернаның бай крәҫтиәне аптырашта ҡала: тир түгеп, тырышып тапҡан байлығынды бирергә тура килә. Һуҡыр тине лә булмаған хәйерселәр һәм ялҡауҙар менән тиң рәттә ҡалаһың икән, нимә тип тир түгеп торорға? Һәр эшмәкәрлектең этәргес сәбәбе - һуңғы һөҙөмтәне алыу хоҡуғы юҡҡа сығарыла. Зирәгерәк крәҫтиәндәрҙең "хәрби коммунизм" сәйәсәтенең иҡтисади шарттарында артыҡ игенен һата йәки сәнәғәт тауарҙарына алмаштыра башлауы аңлашыла. Шул ваҡытта большевиктар ирекле һатыуҙы тыя.

1918 йылда Өфө губернаһына тәғәйенләнгән февраль нарядында 1008 вагон он, 144 вагон ярма, 435 вагон һоло һәм йөҙҙәрсә вагон башҡа атамалы продукттар була. Мәскәү аҙыҡ-түлек комитетының анкетаһына Өфө властары түбәндәгесә яуап яҙа: "Өфө губернаһы тәьмин итеүсе (йәғни донор-төбәк) губерна булып тора... Реквизицияға һәм Икмәк монополияһы тураһындағы законды көсләп тормошҡа ашырыуға халыҡ ҡырҡа ҡаршы..." "Алға" гәзите ул көндәрҙә Өршәкбаш-Ҡарамалы ауылында йәшәүселәр реквизиция отрядының 20 һалдатын ҡаты туҡмауын хәбәр итә. Бындай осраҡтар берәү генә булмай. Үҙенең һуңғы көндәрен йәшәүсе большевистик булмаған азат матбуғат губерна буйынса иген уңмау фактын теркәп, "Бөрө өйәҙендә икмәк эше сағыштырмаса имен... Халыҡ киләсәктә унан артыҡ игендең тартып аласаҡтарын белеп, уны һатып ҡалырға ашыға. Бигерәк тә бойҙайҙы сығарыуҙы тотоуы ауыр... Ирекле сауҙа һәм иген сығарыуға ҡаршы полиция саралары бары тик ришүәтселек һәм суд эштәре генә тыуҙыра..." Асығыусы губерналарҙың Өфөгә иген артынан килеүсе вәкилдәре Өфө губернаһы крәҫтиәндәрендә йәлләү тыуҙырырға тырышһа ла, һуңғылары "үҙҙәре ныҡ мохтажлыҡ кисергән тауарҙарҙы һәм мануфактураны килтергәс кенә иген алып барасаҡтарын" белдерә. Картинаны асығыусы губерналарҙан "тоҡсолар"ҙың ҡоралла бандалары ҡаплап алыуы тураһындағы мәғлүмәттәр тамамлап ҡуя. Улар һалдаттар менән ысын бәрелешкә инә: 1918 йылдың 13 ғинуарында Өфөнән алыҫ түгел "тоҡсолар" прапорщикты һәм һалдатты ата, әммә бер нисә станциянан һуң, көсәйтелгән отрядтың утына эләгеп, 10 кешеһен юғалта. Үҫеп барыусы буталсыҡлыҡ шарттарында Борай Башҡорт милли Советы: "Армия өсөн әҙерләнгән 500000 бот игенде һәм 300000 һумлыҡ кассаны автономиялы райондыҡы тип танырға", - тигән ҡарар ҡабул итә. Бөрөнөң аҙыҡ-түлек комиссары Соколов Өфөгә: "Хеҙмәткәрҙәрҙең ҡото алынған, ҡасалар, бер өлөшө ҡулға алынды. Урындағы халыҡ комиссарҙары советы ярҙам итергә көсһөҙ... Өйәҙҙә иген әҙерләү эше үлемгә дусар ителгән..."- тип хәбәр итә. Борайҙарҙың эшмәкәрлеге губернала ғына түгел, Мәскәүҙә лә ҙур резонанс тыуҙыра. "Алға" большевистик гәзите: "Был - "автономиялы" Борай башҡорттарының дәүләт игененә һәм аҡсаһына оятһыҙ ҡул һуҙыуы... губерна тарафынан февраль нарядының үтәлмәүенә килтереү менән янай, сөнки тап Борай олоҫо иң күп иген бирергә тейеш ине, һәм был йәһәттән уға ҙур өмөттәр бағланды. Совдептың губерна башҡарма комитеты автономиялы районға көсәйтелгән ҡоралла наряд ебәрергә ҡарар итте", - тип асыу менән яҙып сыға. Властар, борайҙарҙың үҙ ғәскәрен ойоштора башлауын белмәй, һаманғаса Борай башҡорттарының ғәмәлен полиция акцияһы менән туҡтатып булған хулиганлыҡ ҡылығы тип кенә иҫәпләй. Борай автономиясылары өйәҙҙең ҡыҙыл гвардияһына ҡоралла ҡаршылыҡ күрһәтергә генә түгел, хатта үҙҙәре өйәҙ үҙәгенә һөжүм итергә йыйына. Был хаҡта үҙенең мемуарҙарында 1918 йылда Бөрө өйәҙендәге ваҡиғаларҙа туранан-тура ҡатнашыусы Г. Акимов бына нимә тип яҙа: "Кулактар һәм уларҙың фронтта булған улдары штаб бойороғо буйынса отрядтар төҙөп, уларҙы нимә етте шуның менән ҡоралландыра. Һәр ауыл отряд төҙөп, уны Борайға, штаб ҡарамағына ебәрергә тейеш була... Ихтилал башланғандан алып бер аҙна эсендә Борайға 10 отряд килә... Баш күтәреүселәрҙең ғәскәре һаны 1000-1200 кешегә етә. Командованиены офицер йәки унтер-офицер дәрәжәһенә эйә элекке фронтовиктарҙан торған штаб үҙ ҡулына ала... Баш күтәреүселәрҙең отрядтары Бөрө ҡалаһына табан хәрәкәт итергә тейеш була, әммә ҡорал, бигерәк тә боеприпастар етмәүгә бәйле ауырлыҡтар һөжүмде тоҡтарлай. Милиция, Советтар менән бәрелештәрҙә ҡулға төшөрөлгән винтовкалар, берданкалар, демобилизацияланған һалдаттар үҙҙәре менән алып ҡайтҡан ҡорал аҙ, ни бары 100 генә дана самаһы була... Һәр винтовкаға берҙән бишкә тиклем патрондар обоймаһы, бер нисә револьвер һәм граната ғына. Төп масса ҡоралһыҙ була... Баш күтәреүселәр ҙур көс менән Бөрөгә табан хәрәкәт итәләр, бөтөн большевиктарҙы үлтерәләр, тигән ҡалала таралған имеш-мимеш, паника тыуҙырыусы һүҙҙәр икеләнеүселәргә тәьҫир итә..."

**Салауат ХӘМИҘУЛЛИН,**
**Рөстәм ТАЙМАҪОВ.**
**(Аҙағы бар).**

*ЖУРНАЛИСТ ЛАҠАПТАРЫ*

## "Баш төҙәтеү"

"Совет Башҡортостаны" (хәҙерге "Башҡортостан") гәзитендә эшләп йөрөгән саҡ. Көн дә үткәрелә торған планеркаларҙың береһендә сираттағы номер буйынса яуаплы дежур булараҡ, мин отчет тотам. Ул саҡтағы мөхәрриребеҙ - хеҙмәткәрҙәргә генә түгел, туған тел, һүҙ байлыҡтарын ҡулланыуға ҡарата ла ифрат талапсанлығы менән билдәле булған Абдулла Исмәғилевҡа бер мәҡәләнең атамаһы оҡшап етмәне бит. "Дежурный ни ҡараған?"тип шелтәле ҡарашын миңә тоҫҡаны мөхәррир. Ә мин оҙаҡ уйлап тормайынса: "Дежур иткән ваҡытта баш төҙәтеп ултырып булмай бит инде, Абдулла Ғиниәтович",- тип яуаплайым. Шул саҡ бөтәһе лә гөр килеп көлөп ебәрҙе, ә мин бер ни аңламайым, аҡланыуҙы дауам итәм: "Был иң тәүҙә яуаплы сәркәтип менән урынбаҫарҙар эше", - тигән булам. Мөхәрриребеҙ мине шелтәләмәне, киреһенсә, көлә-көлә шулай яуапланы:"Бик дөрөҫ әйтәһең, һылыу, дежур иткән ваҡытта баш төҙәтмәйҙәр шул. Күрәһеңме, ағайҙарың быны ҡалай тиҙ аңлап ҡалды"... Шунан һуң ғына мин дә көлөп ебәрҙем.

## "Подвалға ултыртыу", "Башын алып ырғытыу" һәм башҡа "яфа"лар

Редакцияға яңы ғына эшкә килгәнмен. Мәҡәләмде уҡып, ҡул ҡуйғас, мөдир уны секретариатҡа индереп бирергә ҡушты. Барып инһәм, яуаплы сәркәтип урынбаҫары Амантаев ағай үҙенә генә хас ҡәтғилек һәм ҡырыҫлыҡ менән эске телефондан кемгәлер күрһәтмәләр бирә: "Фәләновты (билдәле генә яҙыусының фамилияһын әйтә) "подвалға" төшөрөп ултырт та, "башын" алып ырғыт, "икенсе баш" ҡуябыҙ". Мин ул ваҡытта быларҙың барыһы ла гәзит версткалаусыларҙың "эш терминдары" икәнен белмәй инем әле. Ҡаушабыраҡ ҡалыуымды күреп, ошо уҡ бүлмәлә ултырған яуаплы сәркәтип Аҡмал ағай Саптаров бармағы менән мине эргәһенәрәк саҡырҙы ла, шомло ғына итеп ҡолағыма шыбырҙаны: "Бына, күрәһеңме, беҙҙә ялҡауҙарҙы ни эшләтәләр! Бүлмәңдән сығып йөрөйһө булма, тырышып эшлә!" "Совет Башҡортостаны" һынлы ул ваҡыттағы иң абруйлы гәзиттә фәҡәт тырыш хеҙмәт менән генә журналист булыу мөмкин икәнлекте ул миңә уйынлы-ысынлы бына шулай онотолмаҫлыҡ итеп аңлатты...

## "Хажиевты элеп ҡуйығыҙ!"

Сираттағы планеркаларҙың береһендә яңы һанда сыҡҡан материалдарҙы ентекләп анализлап, баһалағандан һуң, баш мөхәррир бөтәбеҙгә лә һөҙөп ҡарап алды ла :"Йә, бөгөн таҡтаға кемде элеп ҡуябыҙ?"-тип һорай ҡуйҙы. 'Хажиевты, Хажиевты!" тиештек бер тауыштан. Мин инде хәҙер был редакцияла байтаҡ эшләй инем, шуға бер нәмәгә лә аптыраманым. Тик бына кисә генә беҙгә практика үтергә килгән студент егеттең күҙҙәрен ҙур асып һағайып ҡалыуы һаман күҙ алдымда. Ул, әлбиттә, редакцияның иң уңышлы тип табылған мәҡәлә авторын ҙурлап, материалын күптәр "эленеп торорға" теләгән маҡтау таҡтаһына элеп ҡуйыу ғәҙәтен белмәй ине әле...

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

*✓ Икенсе төркөмгә ҡараған инвесторҙарҙы мин табыш артынан йөрөүсе "һунарсылар" тип атайым. Улар беҙгә тик табыш эҙләп кенә килә. Ә ауыл хужалығында табыш булғанда - була, булмағанда - юҡ.*



# АУЫЛДА әллә ҡалаға

**Баш ҡалабыҙ Өфөлә ошо йылдың 27-28 февралендә Бөтә Рәсәй агрофорумы булып уҙҙы. Форум эшендә ҡатнашыусы Рәсәй Федерацияһы Премьер-министры Владимир Путин, ауыл хужалығы ил иҡтисадының стратегик тармаҡтарының береһе һәм йыһан технологияларын етештереү һәм машиналар эшләү өлкәләренә тиң, тип билдәләне. Агрофорум сиктәрендә үткән бөтә саралар ил етәкселегенең, ниһайәт, ауыл хужалығына йөҙ менән борола башлауына ишара булды һымаҡ. Ауыл хужалығына, әлбиттә, ауылда йәшәгән кешеләр һәм шул өлкәлә эшләүсе белгестәр, ғалимдар объектив баһа бирә ала. Ошоно иҫтә тотоп, гәзитебеҙҙең күптәнге яҡын дуҫтары: иҡтисад фәндәре докторы, профессор, Башҡортостан фермерҙар берлеге рәйесе Зифҡәт СӘЙЕТҒӘЛИЕВ менән ауыл хужалығы фәндәре докторы, профессор Ҡадир МӘҒӘФҮРОВты ауыл хужалығы мәсьәләләре тураһындағы әңгәмәгә саҡырҙыҡ.**

**▸ Беҙ үткән быуаттың 90-сы йылдарынан башлап ауыл хужалығын сәсеү еткәс кенә иҫкә төшөрәбеҙ. Ауыл хужалығы, ғөмүмән, һуңғы егерме йылда ҡалдыҡ принцибы буйынса ғына дотацияланған тармаҡҡа әүерелде. Элек гарантиялы дәүләт ярҙамы алған өлкәне хәҙер, асылда, үҙ кесәһен генә ҡайғыртҡан инвесторҙар ҡулына ҡалдырыу ҙа маҡсатҡа ярашлы түгелдер. Совет осоронда ауыл хужалығы өсөн инвестор ролен дәүләт башҡарҙы. Ҡайһы ваҡыт шулай ҙа уйлап ҡуйыла: әллә Рәсәйгә ауыл кәрәкмәйме икән?**

**З. СӘЙЕТҒӘЛИЕВ:** Рәсәйҙә халыҡтың бөгөн 28 проценты ауылда йәшәй. Башҡортостанда иһә дөйөм халыҡтың 39-40 проценты ауылда көн күрә. Ауылға социаль-иҡтисади-сәйәси берәмек итеп кенә түгел, кешеләрҙең, милләттең йәшәү урыны итеп тә ҡарарға кәрәк. Ауыл - ул кешенең тыуыу, үҫеү, белем алыу урыны. Әгәр ҙә кеше алған белеме буйынса ауылда йәшәргә теләй икән, дәүләт үҙенең бер ағзаһы булған кешенең был теләген иҫәпкә алырға бурыслы. Хәҙерге замандың етештереү ысулдары йәһәтенән ҡарағанда, бөгөн ауылда йәшәүселәрҙең һанын ҡыҫҡартырға ла мөмкин булыр ине. Әммә быны эшләргә ярамай. Европала 5 процент халыҡ ауылда йәшәһә лә, улар дәүләттәрен туйындыра ала. Германияла иһә, халыҡтың 6 проценты ғына ауылда йәшәһә лә, улар бер йылда ике Германияны туйындырырлыҡ аҙыҡ-түлек етештерә. Америкала ауыл халҡы дөйөм халыҡтың 2,5 процентын ғына тәшкил итә. Әммә беҙ былдай сағыштырыуҙарға ҡарарға тейеш түгелбеҙҙер. Ни өсөн тигәндә, Ер шары халҡының интенсив рәүештә артыуын күҙ уңында тотҡанда киләсәктә иң ҡиммәтле тауар ер буласаҡ, йәғни ерҙең иген, ашлыҡ үҫә торған өлөшө оло хазинаға тиңләнәсәк. Шуға күрә мин, ауылда нисек кенә ҡыйын булмаһын, ундағы халыҡты күпләп ҡалаға күсереү яғында түгелмен. Шунсама халыҡты, ҡатлы-ҡатлы йорттар һалып, автобустарға тейәп ҡалаға алып киләйекме инде? Нимә генә тимә, беҙ ерле милләт вәкилдәре һәм беҙҙең төп тамырҙарыбыҙ ауылдарыбыҙға барып тоташҡан. Мин үҙем дә инде нисә йыл ҡалала йәшәһәм дә, ауыл кешеһемен. Унда минең үҙ йортом бар. Йыл һайын мин унда балаларымды, ейәндәремде алып барам. Шуға күрә, беҙ ауылға иген, ит-һөт, йәшелсә-емеш етештерә торған завод тип кенә ҡарай алмайбыҙ. Ауыл беҙҙең өсөн милләтебеҙҙең тыуған һәм уның киләсәгенең тыуасаҡ урыны. Ауыл - милләтебеҙҙең сәңгелдәге. Шуға күрә беҙ ауылда аҙыҡ-түлек етештереү өсөн кеше аҙ талап ителә, тип кенә үҙебеҙҙең тамырҙарҙан үҙебеҙ теләп баш тартырға тейеш түгелбеҙ.

**Ҡ. МӘҒӘФҮРОВ:** Зифҡәт Ислам улы, һеҙ милләт үҙен һаҡлап ҡалырға уйлаһа, ауылды ташлап китергә тейеш түгел, тип иҫәпләйһегеҙме?

**З. СӘЙЕТҒӘЛИЕВ:** Улай уйламайым, сөнки урбанизация процесы, беҙ теләһәк тә, теләмәһәк тә, барыбер бара. Ауыл йәштәре ҡалалағы юғары уҡыу йорттарына уҡырға инә, улар бөгөн Өфөлә генә түгел, сит илдәрҙә, Рәсәйҙең башҡа ҡалаларында уҡый һәм күбеһе һуңынан ҡалала тороп ҡала, икенсенән, күп кенә йәштәр ҡалаға килеп эшкә урынлаша. Әммә был күренеш күмәк төҫ алһа, ни эшләрбеҙ? Беҙгә милләтебеҙҙең сәңгелдәген һаҡларға кәрәк. Хәҙерге заманда "Тыуған ерҙән туйған ер яҡшы" тигән әйтем модала. Ә ниңә кеше үҙенең тыуған ерен туйған еренә әйләндерергә тейеш түгел әле? Миңә был йәһәттән венгрҙарҙың ауылдары оҡшай. Бөгөн венгр ауылдарында аҙыҡ-түлек етештереүҙән тыш, телевизор, йорт йыһаздары ла яһайҙар.

**Ҡ. МӘҒӘФҮРОВ:** Минең иҫәпләүҙәр буйынса, башҡорт халҡы бөгөн ауылда артығыраҡ. Хәҙерге ваҡытта милләтебеҙҙең 56 проценты ауыл ерендә йәшәй. Ауылда йәшәү яҡшы, сөнки унда рухи мөхит көслө. 70-се йылдарҙа армиянан ҡайтып, тыуған ауылында ҡалған егеткә 100 һум аҡса биреп, колхозда, совхозда эшкә ҡалдыралар ине. Бөгөн ул егеттәр бер ерҙә лә эшләмәй, эскелеккә бирелә, ҡыҫҡаһы, юҡҡа сығып бара. Артабан да беҙ, башҡорт ауылда йәшәргә тейеш, тигән сәйәсәт алып барһаҡ, был йәмһеҙ күренештәр дауам итәсәк. Икенсенән, ауылда йәшәүсе халыҡ тулыһынса натураль хужалыҡ менән шөғөлләнә, йәғни аҙыҡ-түлек етештерә. Ҡалалағы халыҡтың яртыһынан күберәге шул етештерелгән аҙыҡ-түлекте һатыу, бүлеү, үҙләштереү менән мәшғүл. Етештергән өсөн ауыл халҡына тиндәр генә түләнә. Мин үҙем колхозда ете йәшемдән эшләй башланым. Беҙ, мәҫәлән, 1965 йылға тиклем "таяҡ"ҡа эшләнек. Әгәр ҙә беҙ артабан да башҡорт халҡын күпләп ауылда ҡалдырһаҡ, беҙ башҡа халыҡтарҙы хеҙмәтләндереүгә генә дусар ителәсәкбеҙ. Шуға күрә, беҙ бөгөн башҡортто ауылда ҡалдырырға өгөтләргә тейеш түгелбеҙ. Килһендәр ҡалаға, һис юғы, урам һеперһендәр, таксист булһындар.

**З. СӘЙЕТҒӘЛИЕВ:** Һеҙ дөрөҫ әйтәһегеҙ, үткән быуаттың 90-сы йылдарынан башлап беҙҙең республикала иң ауыр хәлдә ҡалған халыҡ - ауылда йәшәгән башҡорт халҡы. Был хәлгә беҙҙең етәкселәр, интеллигенция дөрөҫ баһа бирергә һәм ауыл халҡын был хәлдән ҡотҡарыу өсөн саралар күрергә бурыслы.

**▸ Дәүләт тарафынан ауыл хужалығына ярҙамды һеҙ нисегерәк итеп күҙ алдына килтерәһегеҙ?**

**З. СӘЙЕТҒӘЛИЕВ:** Элек бюджеттан ауылға 17 процент ярҙам килә ине, әле 1 процент та түгел, ә 0,8 процент ҡына. Техника иҫкерҙе хәҙер. Форумда Сыуашстан ҡулланыусылар союзының етәксеһе сығыш яһаны. Ул үҙҙәрендә асфальт, газ килеп етмәгән ауылдың булмауы хаҡында әйтте. Хәҙер әйтегеҙ, Сыуашстанда бармы берәй нефть эшкәртеү заводы, асфальт яһай торған берәй сеймал бармы? Беҙҙә сеймал бар, ә асфальт барып етмәгән ауылдар меңәрләгән. Бөтөн газ торбалары Башҡортостан аша үтһә лә, газды бөтөнләй күрмәгән ауылдар меңәрләгән. Сыуаштар бөгөн макулатура йыя, ә беҙ һарыҡ тиреләрен 5 һумға тапшырабыҙ. Аҙаҡҡы тапҡыр үткән хосусилаштырыуҙа ла беҙ отолоп ҡалдыҡ. Заводтар, энергия сығанаҡтары, иҡтисадтың иң "майлы" өлөштәре башҡаларға китте. Беҙгә ауылдарҙа түбәһендәге плитаһы төшкән мал аҙбарҙары, ватыҡ комбайндар, тракторҙар ғына тороп ҡалды. Миңә яңыраҡ Социалистик Хеҙмәт Геройы Риза Яхиндың улы килде. Ул игенселек менән шөғөлләнер өсөн 300 гектар ер һораған, тик уға ер бирмәйҙәр икән. Риза Яхин 50 йәшен үтеп, күп тә йәшәмәйенсә донъя ҡуйҙы, йәғни ғүмере буйы баҫыуҙа саң эсендә йөрөп, туҙан, ҡылсыҡ йотоп йәшәүе быға булышлыҡ итте. Бына шундай кешенең улына ер бирмәү мөмкинме инде? Ул бит шул ерҙә тыуып үҫкән типһә, тимер өҙөрлөк, көрәктәй ҡуллы егет, килмешәк түгел. Беҙҙә бер-беребеҙгә ярҙам итеү, бер-беребеҙҙе күтәремләү етмәй. Саҡ ҡына берәүебеҙ өҫкә күтәрелһә, икенселәребеҙ уны батырырға ғына тора. Минең ауылда йәшәүсе милләттәштәремә "Ауылығыҙҙы ташлап ҡалаға китегеҙ" тип әйтергә телем әйләнмәй, уҡыған кеше үҙ юлын табыр, ҡалаға ла килер.

**Ҡ. МӘҒӘФҮРОВ:** Бөгөн Әбйәлил, Баймаҡ, Учалы райондары йәштәренең ҙур өлөшө яҡындағы Магнитогорск ҡалаһына барыуҙы хуп күрә. Көнбайыш райондары Ҡаҙанды үҙенең баш ҡалаһы итеп күргән кеүек, улар өсөн Магниторгск ҡалаһы шул ролде үтәй. Был бик насар күренеш, минеңсә. Беҙҙең егеттәрҙең иң түбән эш хаҡына, иң бысраҡ һәм ауыр эштә ул ҡалала йөрөүҙәре һис кенә лә маҡтарлыҡ шөғөл түгел. Икенсенән, беҙҙең ауылдарҙа эт һуғарып йөрөмәй торған йәштәр Ҡаҙанға, Магнитогорскиға, Екатеринбургҡа, Мәскәүгә китеп бөтһә, Өфөгә килеүселәр аҙ буласаҡ. Шуның өсөн тағы берҙе ҡабатлайым: ауылдан сығып китә алырлыҡ йәштәр һәм башҡалар Өфөгә һәм Башҡортостандың башҡа ҡалаларына барып эш табырға, яйлап шунда урынлашырға тейеш. Шуныһыҙ, киләсәктә беҙҙең Өфөлә генә түгел, ауылдарҙа ла тормош алға китмәйәсәк. Сөнки хәҙерге ваҡытта ауылда шәхси хужалығын үҫтерә алырлыҡ халыҡ ауылда йәшәүселәрҙең 15 процентын ғына тәшкил итә, һәр хәлдә, милләттең 56 проценты ауылда йәшәргә тейеш түгел, тип иҫәпләйем. Ауылда уҡытыу кимәле бөтөнләй икенсе. Ауылда уҡып, аҡыл кимәлең ни тиклем юғары булмаһын, Рәми Ғарипов кеүек бөйөк яҙыусы булып китергә мөмкинһең, әммә алдынғы ҡарашлы иҡтисадсы, банкир, сәйәсмән булыуың икеле.

**З. СӘЙЕТҒӘЛИЕВ:** Ауылда йәшәп, бер ни эшләп булмай, тигән фекер менән һис тә килешмәйем. Бына минең үҙемдең ауылда бизнесым бар. Ҡош-ҡорт бәпкәләре үҫтереп һатыу эше менән шөғөлләнәбеҙ. Беҙҙән Төмән өлкәһенән, Баймаҡ, Әбйәлил районынан бәпкәләр алалар. Әбйәлилдә филиал эшләргә ниәт бар. Күпме йылдар ҡалала йәшәһәм дә, унда үҙ эшемде аса алмайым, сөнки мин ҡала психологияһын белмәйем, мине ҡала эшҡыуарҙары үҙ араһына индермәй ҙә. Әле минең Өфөлә тыуып үҫкән улым ауылға барып, фирмабыҙҙа директор урынбаҫары булып эшләп йөрөй.

**▸ Хөкүмәтебеҙҙең Урал аръяғы районларын үҫтереү буйынса программаһына ярашлы, был төбәккә инвесторҙар йәлеп итеү мәсьәләһе ҡалҡып сығып, урындағы етәкселек һәм ерле халыҡ инвесторҙарға үҙ шартын ҡуйғас (һалымдарҙың күп өлөшөн урында ҡалдырыу һәм урындағы халыҡты эш менән тәьмин итеү мәсьәләһе), инвесторҙар уйға ҡалды. Ни өсөн тигәндә, файҙаһы булмаған эшкә берәү ҙә тотонмай, икенсенән, һеҙ әйтмешләй, ауыл хужалығын тик дотация ярҙамында ғына үҫтереү мөмкин. Нисек уйлайһығыҙ, тик инвесторҙарға ғына таянып, Башҡортостандың ауыл хужалығын үҫтереүгә ынтылыу дөрөҫмө?**

**З. СӘЙЕТҒӘЛИЕВ:** Был һорауҙы икегә бүлергә кәрәк. Беренсенән, беҙҙең республика өсөн Урал аръяғы районлары ниндәй роль үтәй һуң? Беҙҙең республика халҡының тамағын туйҙырыр өсөн йылына 400 мең тонна иген кәрәк. Иҡтисад арыу саҡта Урал аръяғы районлары 400 мең тонна иген үҫтерә ине. Ә Башҡортостандың башҡа төбәктәрендә фураж игене генә үҫә. Икенсенән, хәҙерге көн күҙлегенән ҡарағанда, кем һуң ул инвестор? Инвесторҙарҙың да төрлөһө була. Уларҙың тәүгеләре ошонда тыуып үҫкән төп халыҡ вәкилдәре. Улар тыуған ауылын ярата, ауылдаштарына ярҙам итергә теләй, ситкә китергә йыйынмай. Икенсе төркөмгә ҡараған инвесторҙарҙы мин табыш артынан йөрөүсе "һунарсылар" тип атайым. Улар беҙгә тик табыш эҙләп кенә килә. Ә ауыл хужалығында табыш булғанда - була, булмағанда - юҡ. Башҡортостанда биш йылдың ике йылы мотлаҡ рәүештә ауыр килә. Был шартҡа инвесторҙар риза түгел. Улар беҙгә килеп, ферма төҙөп, мал аҫрап, тиреҫ еҫкәп ятҡансы, аҡсаһын банкка



***Мин, ауылда нисек кенә ҡыйын булмаһын, ундағы халыҡты күпләп ҡалаға күсереү яғында түгелмен. Шунсама халыҡты, ҡатлы-ҡатлы йорттар һалып, автобустарға тейәп ҡалаға алып киләйекме инде? Нимә генә тимә, беҙ ерле милләт вәкилдәре һәм беҙҙең төп тамырҙарыбыҙ ауылдарыбыҙға барып тоташҡан. Ауыл беҙҙең өсөн милләтебеҙҙең тыуған һәм уның киләсәгенең тыуасаҡ урыны. Ауыл - милләтебеҙҙең сәңгелдәге.***

һала ла, диңгеҙ буйына барып ята һәм, әйтергә кәрәк, мал аҫрағанға ҡарағанда, табышты күберәк ала. Нимә һуң ул хәҙерге ваҡытта ферма төҙөү? Иҡтисадта "неликвидный" тигән төшөнсә бар. Әйтәйек, һин 20 миллионға ферма төҙөп ултыртып, уны һатып ҡара, хатта 2 миллионға ла һата алмаясаҡһың. Ни өсөн тигәндә инвестицияла мөлкәттең күпме тороуы мөһим түгел, күпме табыш килтереүе мөһим. Артабан был ферманы ҡайҙа ҡуйырға һуң? Уны клуб, мәктәп итеп тә булмай. Ҡыҫҡаһы, ауылда барлыҡҡа килгән мөлкәт "малоликвидный" мөлкәткә иҫәпләнә. Ғөмүмән, бизнес - ул терегөмөш һымаҡ, саҡ ҡына иғтибарһыҙ булдыңмы, табыш ҡулыңдан ысҡына ла китә. Был терегөмөште ҡулда тотор өсөн, ай-һай, ниндәй булырға кәрәк. Ҡайһы берәүҙәр уны тотор өсөн сит илдәргә, сит ҡитғаларға сығып китергә мәжбүр була. Шуға күрә дәүләттән ауыл хуҗалығы...

Үткән быуаттың 90-сы йылдарынан яңы иҡтисадҡа күсеүгә 20 йыл ваҡыт үтте. Ошо ваҡыт эсендә ауыл хужалығы емерелеүҙән башҡаны күрмәне. Беҙ ауыл хужалығында ғына түгел, сәнәғәттә икеләтә юғалтыу кисерҙек. Ҡыҫҡаһы, тәүге 20 йылда - 9,5, икенсеһендә - 6,5 тапҡырға үстек, һуңғыһында 2,5 мәртәбәгә кәменек. Бөгөн иһә, нефтҡә, газға хаҡ арттырыу иҫәбенә генә йәшәйбеҙ. Бына минең таҡҡан галстугым Италияла эшләнгән, костюмым менән ботинкам - Германияныҡы, салбарымдың ҡайышы ла Рәсәйҙеке түгел, күлдәгем дә ситтән, носкийым Ҡытайҙыҡы. Ҡыҫҡаһы, өҫтөмдәге барлыҡ кейгәнем ситтән килгән, тик үҙем генә башҡорт балаһымын.

**Ҡ. МӘҒӘФҮРОВ:** Рәсәй Хөкүмәтенең ауыл хужалығын үстереренә өмөтләнеү, был хаҡта хыялланыу - буш. Дөрөҫ хәбәр һөйләүселәр күп, әммә һатыусы министр булып ултырған саҡта хәл эш итә башланы. Улар ерҙәрендә фураж, үлән үстерергә йыйына. Тик уларға бөгөн закон нигеҙендә ярҙам кәрәк. Икенсенән, бөгөн беҙҙең халыҡ көс түгеп үстергән малды тажиктар, әзербайжандар килеп, унар меңгә һатып алып китә лә, уны баҙарға утыҙ меңгә һата. Бында ла урындағы халыҡҡа ярҙам кәрәк.

Өсөнсөнән, беҙгә бөгөндән һәр урында натураль аҙыҡ-түлекте ҡулланыуҙы пропагандалай башлау фарыз. Был юл ауылдарҙа йәшәүсе халыҡҡа ярҙам итеүҙең иң мөһим өлөшө буласаҡ. Әгәр ҙә ихтыяж барлыҡҡа килһә, тәҡдим буласаҡ. Әле илебеҙ ВТО-ға инергә тора, беҙ был ойошмаға бары тик натураль аҙыҡ менән генә инә аласаҡбыҙ.

**З. СӘЙЕТҒӘЛИЕВ:** Хәҙер эш башлап киткән фермерҙарға миллион ярым аҡса бирәләр, әммә аҡса менән генә лә әллә нимә ҡыйратып булмай. Беҙгә ер эшенә бәйле, халыҡтың рухын статус булдырылһа, киләсәктә фермерҙарыбыҙ бермә-бер артасаҡ.

**З. СӘЙЕТҒӘЛИЕВ:** Хәҙерге көндә шәхси ярҙамсы хужалыҡты ваҡ тауар хужалығы итеп үҙгәртеп, уға рәсми статус бирергә булыр ине.

**▸ Ауылда етештерелгән аҙыҡ-түлекте һатыу мәсьәләһен нисек яйға һалырға булыр, тип уйлайһығыҙ?**

**З. СӘЙЕТҒӘЛИЕВ:** Был иң ауыр һәм ҡатмарлы мәсьәлә һанала. Агрофорумда мин Татарстан фермерҙары етәксеһе менән осраштым. Улар июнь айында Ҡазан уртаһында ауыл хужалығы тауарҙарын һатыр өсөн баҙар асасаҡ. Быйыл өсөн уларға 24 гектар ер бүлгәндәр, баҙар төҙөр өсөн миллиард ярым аҡсаны Мәскәү, икенсе миллиард ярымын республика биргән. Баҙарҙың проектын Испания фирмаһы баҙарына ҡарап эшләткәндәр.

# ҠАЛЫРҒАМЫ,

## күсенергәме?

жалыйына ярҙам ғына етмәй, ауылда йәшәүселәрҙән дә күп нәмә тора. Ауыл хужалығын күтәреү - ул сәйәси мәсьәлә, ул дәүләттең бурысы, дәүләт уға стратегик мәсьәлә итеп тотонорға бурыслы. Беҙ һуғыштарҙың, революцияларҙың ни өсөн башланғанын беләбеҙ. Илде ҡыйратыр өсөн унда йәшәүселәрҙе бер аҙ ас тотоу ҙа етә, ул сағында коттедждарың да, сит ил машиналары ла кәрәк булмаясаҡ. Ауылда етештерелгән тауар арзан хаҡҡа һатыла, ысынында иһә, донъяла унан да ҡиммәтле тауар юҡ. Нефтҡә, газға хаҡ күтәрелә башлаһа, ил етәкселәре ыжламай ҙа, ә икмәккә хаҡ саҡ ҡына арта башлаһа, шундуҡ телгә киләләр. Сөнки икмәктең хаҡы властың яҙмышын хәл итә.

**Ҡ. МӘҒӘФҮРОВ:** Зифҡәт Ислам улы, дәүләт ауыл хужалығын күтәреү, үстереү буйынса нимәләр эшләр тип уйлайһығыҙмы?

**З. СӘЙЕТҒӘЛИЕВ:** Был һорауға яуап бирер өсөн тарихтағы өс 20 йыллыҡты бүлеп ҡарайыҡ. 1921 йылдан алып 1941 йылға тиклем илдең иҡтисады, шул иҫәптән ауыл хужалығы 9,5 мәртәбәгә үҫеш кисергән. Һуғышҡа ингәндә барлыҡ һалдаттарҙы туйҙырып ашатырлыҡ ризыҡбыҙ, кейендерерлек кейемебеҙ булған. 1945 йылды алайыҡ. Ил, уның иҡтисады тулыһынса емерек хәлдә була, Гитлер Мәскәүгә тиклем барлыҡ ҡала-ауылдарҙы ер менән тигеҙләп, ҡаралтымөлкәтте яндырып, 9-10 миллион кешене үлтереп китә. 1945 йылдан һуң 20 йыл үтеүгә, илебеҙ тағы күтәрелеш кисерә. Был саҡта инде йыһанды яулаған илебеҙ Америкаға теш күрһәтеп һөйләшә башлай. Ҡыҫҡаһы, 20 йыл эсендә ер менән тигеҙләнгән илебеҙҙән өр-яңы ил тыуа. Хәҙер инде һуңғы 20 йылды ҡарайыҡ.

үҙгәрмәйәсәк. был Рәсәйҙә һәр ваҡыт ике һорау бар: "Кем гәйепле?" һәм "Ни эшләргә?". Минең күҙаллауымса, яҡындағы ун йылда ауыл хужалығын күтәреүгә дәүләт яғынан артыҡ хәрәкәт көтөлмәйәсәк тә. Шундай шарттарҙа беҙгә ауыл хужалығын нисек итеп тергеҙергә, башлыса ауыл ерендә йәшәгән халҡыбыҙға нисек ярҙам итергә һуң? Бөгөн фермерҙар ауыл хужалығы продукцияһының - 3-6, ауыл хужалығы предприятиелары - 30, шәхси хужалыҡтар 60-67 процентын етештерә. Тимәк, беҙ бөгөн тағы бер "Алексеевский", тағы бер "Рощинский" йәки 500 ферма төҙөһәк тә, ауыл хужалығын алға ебәрә алмаясаҡбыҙ. Телә һә ниндәй система һәләкәтле

күтәрергә, уны был эшкә дәртләндерергә кәрәк. Ни тиһәң дә, бөгөн генә ауылдан ҡуптарылып, йорт һатып, донъя ташлап сығып китеп булмай. Әле киләсәктә эш башлаған фермерҙарға төрлө формалағы кредиттар, бер тапҡыр бирелә торған ярҙам күрһәтеү күҙ уңында тотола. Былтыр техника һатып алған кешегә быйыл хөкүмәт бер миллион һумлыҡ техниканың 400 мең һумын ҡайтарып бирәсәк. 11 процентлыҡ кредит биреү ҙә ҡарала, уның 8 процентын Мәскәү, ҡалғанын республика түләйәсәк. Үҙ эшен башлаусы фермерҙар ошондай ярҙамдан файҙаланһын ине. Беҙ әлеге ваҡытта төньяҡкөнбайыш һәм көньяҡ-көнсығыш райондарға ярҙам итергә ниәтләнәбеҙ. Бынан тыш, Урал арьяғының иҡтисадын үстереү буйынса Президенттың махсус программаһы бар. Фермерҙар

Ә беҙҙең Өфөнөң Үҙәк баҙарында француз хушбуйы, ҡытай сепрәге һаталар. Унда ауыл хужалығы продукцияһын һатыр өсөн бәләкәй генә ҡыҫыҡ мөйөш ҡалдырҙылар. Унда ла ауыл кешеһе килеп, үҙенең тауарын һата алмай. Өфөлә беҙгә ауыл хужалығы тауарын һатыр өсөн махсус баҙар кәрәк.



***Хәҙерге ваҡытта милләтебеҙҙең 56 проценты ауыл ерендә йәшәй. Ауылда йәшәү яҡшы, сөнки унда рухи мөхит көслө. 70-се йылдарҙа армиянан ҡайтып, тыуған ауылында ҡалған егеткә 100 һум аҡса биреп, колхозда, совхозда эшкә ҡалдыралар ине. Бөгөн ул егеттәр бер ерҙә лә эшләмәй, эскелеккә бирелә, ҡыҫҡаһы, юҡҡа сығып бара. Артабан да беҙ, башҡорт ауылда йәшәргә тейеш, тигән сәйәсәт алып барһаҡ, был йәмһеҙ күренештәр дауам итәсәк.***

реформаға дусар ителгән икән, ул барыбер емереләсәк. Ауыл һуңғы егерме йылда дәүләт тарафынан ташлап ҡуйылды. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, һаҡланып ҡалған шәхси хужалыҡтар бөгөн кооперативтарға берләшергә әҙер тора. Бында дәүләт яғынан аҙ ғына ярҙам кәрәк. Аҡсалата түгел, һәр бер урында ойоша башлаған хужалыҡтарҙы табып, уларға был эшендә булышлыҡ итеүгә ҡайтып ҡалырға тейеш дәүләт ярҙамы. Мин тыуып үҫкән Әбйәлил районының элекке Шайморатов колхозы ерҙәре егерме йыл буйы ташландыҡ хәлдә булып килеп, ниһайәт, бөгөн унда пай хужалары берләшеп

бөгөн республикаға 6 процент аҙыҡ-түлек бирә, әммә барлыҡ техниканың 21 проценты уларҙың ҡулында. Шул уҡ ваҡытта уларҙың баҫыуында бер гектар ашлыҡ та йыйылмай ҡалманы. Ҡайһы бер фермерҙарҙың йыллыҡ аҡса әйләнеше 130 миллион һумды тәшкил итә. Уртаса алғанда, бер фермерҙың 3-4 миллион һумлыҡ аҡса әйләнеше бар һәм ул йылына миллион ярымлыҡ табыш ала. Һәр хәлдә, фермерҙың бөгөн кесәһе буш түгел.

**Ҡ. МӘҒӘФҮРОВ:** Шәхси ярҙамсы хужалыҡтар менән фермерҙар араһында тағы ла бер статус булдырыу зарур. Шәхси хужалыҡтан фермерлыҡҡа күсеү өсөн

**Ҡ. МӘҒӘФҮРОВ:** Баҙар кәрәк, әлбиттә, әммә закон булмаһа, ул баҙарҙы тағы ла ҡытай сепрәге баҫып аласаҡ. "Колхоз баҙары" кеүек бик күп баҙарҙар шундай уҡ яҙмышҡа дусар булды. Мин бында икенсе бер мәсьәләне лә күрәм. Беҙгә үҙебеҙҙең тауарҙарҙы һатыуҙы ойоштороусы сауҙа селтәрҙәре төҙөү зарур. Бөгөн ни өсөн беҙ үҙебеҙҙең тауарҙы һата алмайбыҙ? Сөнки бар урында ла "Полушка", "Магнит", "Пятерочка" кеүек тиҫтәләгән супермаркеттар селтәре баҙарҙы яулап алған. Улар араһында бары "Матрица" ғына үҙебеҙҙеке. Беҙ аҡсабыҙҙың ситкә китеүен, әйткәнемсә, натураль аҙыҡ-түлеккә

күсеү юлы менән туҡтата алабыҙ. Ул осраҡта супермаркеттар үҙҙәренән-үҙҙәре ябылып бөтәсәк. Шул саҡта ғына үҙебеҙҙең хәләл магазиндарҙы, хәләл кафеларҙы йәйелдереү мөмкин буласаҡ. Мин ул магазиндарҙың исемдәрен ошо рәүешле итеп күрәм: "Яңауыл һөтө", "Бөрйән балы", "Баймаҡ ҡаҙылығы", "Әбйәлил ҡымыҙы", "Илеш йәшелсәһе", "Хәйбулла икмәге" һ.б. Әйткәндәй, хәләл аҙыҡ-түлек магазиндарына ингәнегеҙ бармы? Унда сиратта тороусыларҙың яртыһы мосолман булһа, ҡалғандары христиан динлеләр. Был нимә тураһында һөйләй? Беҙгә хәләл, натураль ризыҡҡа күсергә барлыҡ нигеҙ бар, эште рекламанан башларға ғына кәрәк, халыҡҡа "Беҙ - натуралдар!" тигән девиз ташларға кәрәк.

Башҡортостанда ауыл хужалығы продукцияһын етештереү, һис шикһеҙ, экстенсив юлға ҡоролған булырға тейеш. Бының маҡсаты нимәлә? Химик ашламалар ҡулланмай ғына экологик яҡтан таҙа аҙыҡ-түлекте күберәк үстерер өсөн ҙурыраҡ майҙан кәрәк, бының өсөн дәүләттән күберәк дотация талап ителә. Унышты центнеры кәмей, уның ҡарауы, натураль аҙыҡ-түлек йыйып алабыҙ.

**З. СӘЙЕТҒӘЛИЕВ:** Канадала үстерелгән бойҙай гектарынан 18 центнерҙан да юғары булмаған осраҡта эталон булып иҫәпләнә. Уны үстереү өсөн химик ашламалар бөтөнләй ҡулланылмай.

Мин йылҡы ите хаҡында әйтеп үткем килә. Үткән йыл мин Әбйәлил районында үҙемдең бизнесты үстерергә йөрөнөм. Миңә унда 350 баш быуаҙ бейә тәҡдим иттеләр. Мин иҫәпләй башланым. Май айында йылҡы 700 башҡа барып етәсәк. Бейәләрҙе һатып алыр өсөн өс миллион ярым ғына аҡса кәрәк ине. Тик йылҡы ите бизнесы Рәсәйҙә булмағанға күрә, был эштән баш тартырға тура килде. Ҡыҫҡаһы, мин был бейәләрҙе һатып алып, һуңынан ул аҡсаны кире ҡайтара торған юлды таба алманым. Беҙҙә йылҡы итенә еткән ит юҡ, әммә йылҡыға бәйле эшҡыуарлыҡ үҫешә алмай. Беҙҙә йылҡы ите етештереү бизнесын юлға һалырға кәрәк. Республикабыҙҙа 150 мең баштан артыҡ йылҡы малы бар, башҡа урында бындай байлыҡ юҡ.

ШУЛАЙ ИТЕП...

**Беҙҙең алда шундай дилемма: ауылда ҡалырғамы, әллә ҡалаға күсергәме? Ауылда ҡалһаҡ, беҙ ни өсөн унда ҡалырға ла, ҡалаға күсһәк, ни өсөн унда күсергә? Был һорауҙарға Зифҡәт Ислам улы менән Ҡадир Барый улы яуап бирҙе лә инде һәм, әйтергә кәрәк, уларҙың икеһенең дә һүҙҙәрендә хаҡлыҡ бар. Тимәк, беҙгә ауыл менән ҡала араһындағы алтын урталыҡты ғына табырға ҡала. Белгестәр иҫәпләүенсә, беҙҙәге дөйөм халыҡтың 13 проценты ауылда йәшәһә лә, ауыл ҡаланы туйындыра аласаҡ. Әгәр ҙә беҙ ауылды, Зифҡәт Ислам улы әйткәнсә, милләтебеҙҙең сәңгелдәге итеп ҡарайбыҙ икән, бында туйындырыу принцибы тап килмәй. Ҡыҫҡаһы, һорауҙар ҡуйылды: ауылда ҡалырғамы, әллә ҡалаға күсергәме? Был һорауҙарға һеҙҙән дә яуаптар көтәбеҙ, хөрмәтле уҡыусыларыбыҙ!**

**Әмир ҒүМӘРОВ**
**әңгәмә ҡорҙо.**

✓ ***Эҙләй торғас, эсенән әҙәмдәр баҡҡан һынташтар янына барып сыҡты. Береһенән, кеше оҙонлоғо ҡара таштан, серле генә итеп Әғләметдине ҡарап тора. Тап үҙе! Уның һыны, ҡарашы! Шаҡ ҡатты Сәғирә ҡарсыҡ.***






Сәғирәнең үҙенән ике йәшкә оло ағаһы Йәүҙәт ете синыфты бөткәс, Аҡтауға уҡырға юлланғайны. Һуғыш сығып, көнитмеш мөшкөлләнгәс, ҡайтып килде. Уны шунда уҡ йылҡы көтөргә, тибендә йөрөтөргә ҡуштылар. Тора-бара һайланмыш аттарҙы яуға оҙаттылар. Ир-ат менән бергә ауылдан ҡот та китте, йорт-ҡура етемһерәп ҡалды. Яу булып осоп, үҫемлектәрҙе кимергән, тәбиғәтте ҡороҡҡан ҡара сиңерткә һымаҡ, һәр кемде тиерлек аслыҡ аймап, ҡармап алды. Һыйырҙары юҡтар, бәрәңге сәсмәгәндәр ҡоро һөйәккә ҡалды, әкәм-төкәм тағамдан шешенеп, ҡараңғылыҡҡа сумды. Шул хәсрәтле замандың күңел йылытыр өсөндөрмө сығарылған бер өн-өндәшен Сәғирәнең ҡәрҙәштәре әйтешер булды:

*Ғәйникамал, Шәмсикамал,*
*Сәй эсергә беҙгә бар.*
*Әпәй апар, май ҙа апар,*
*Сәй үҙебеҙҙә лә бар.*

Ас ҡорһаҡ, тәненә үләт, зәхмәт ҡайғылырын оноттороп, әүәл сикәнеп морон борғанды көҫәтә. Күмәк хужалыҡ йомоштары менән йөрөгәндә, Сәғирә йән тетрәткес хәлдәрҙе йыш күрә. Ана, уның йәшендәге өс үҫмер үлгән эттең тиреһен һыҙырып маташа, йәнә бернисәһе, усаҡ яғып, күгәрсен өтә. Сирҡаныс, ытырғаныс... Бәләкәс кенә бер малай: "Сәпсек бешереп ашайым тигәйнем, сүмес бирмәйҙәр," - тип сеңләй...

Абау... Эт, янут, йомран, бесәй,һайыҫҡан, ҡоҙғон итен ашайҙар. Ерәнә Сәғирә. Үлеп асыҡһа, кем әйтмешләй, эсендә бүреләр олоһа, ул да сирҡанмаҫ ине. Ярай әле уның Йәүҙәт ағаһы сос, отҡор: бабаһынан ҡалған мылтыҡ менән һунар итә, ҡор, сел, һуйыр, ҡоралай килтерә, күрше-күләнгә лә өлөш сығара. Яҙын, йәйен йылғаға мурҙа һалып, балыҡ та тота. Мәгәр йәше тулыр-тулмаҫтан уны ла һуғышҡа алдылар. Үҙе лә яуға китергә атлығып тора ине.

Эй, һуғыштың яманы! Эй, уның бәндәләрҙе ҡанхур, кәмхур иткән, бахыр иткән касафаты!.. Ҡышын, ҡаты һыуыҡтар мәлендә, мәрхүмдәрҙе ерләргә, йола буйынса һуңғы юлға оҙатырға әмәл юҡ, ҡарт-ҡоро, ҡатын-ҡыҙ мөсһөҙ. Сәғирәнең серҙәш әхирәтенең өләсәһе лә иртән тороуға һүнеп ҡуйған. Ейәнсәре менән икәү генә көн итәләр ине. Уны, кешегә ғәжәп мәрхәмәтле ҡарсыҡты, үләкһә кеүек соҡорға бырағытыу килешмәй.

Илап шешенеп бөткән әхирәтен йәлләп, тиҫтерҙәрен эйәртеп, Сәғирә зыяратҡа китте. Уның ҡәберҙе нисек ҡаҙығандарын күргәне бар ине. Малайҙар ҙа юҡ, исмаһам. Эшкингәндәрен эшсе һөнәрҙәренә өйрәтергә Аҡтауға ФЗО мәктәбенә алдылар.

Шыҡрайып туңған балсыҡ тапсыҡтай ғына кителеп сыға. Кәйлә менән соҡой-соҡой, тымыра-тумыра һындары ҡатты. Бөгөлгән бармаҡтары турайммай, ҡатҡан да ҡалған. Ыңғыраша-ыңғыраша ҡәберҙе тәрәнәйттеләр алмаш-тилмәш. Күҙ алдары ҡараңғыланып, тупраҡҡа ауҙылар. Зәйнәп тәшкәйне, соҡорҙан сыға алмай ҙа ҡуйҙы. Тырмаша торғас, бөтөнләй хәлдән тайып йығылды. Инде теле көскә әйләнә:

- Барыбер ү-үләм. Ризыҡ юҡ бер тағәм. Өләсәйем менән бергә... Бергә күмегеҙ ҙә ҡуйығыҙ.

- Юҡты һөйләмә, Зәйнәп. Тор!

- Яҙ етһә, үлмәбеҙ.

- Һөтләгән, ҡуҙғалаҡ, бетләкәй ашарбыҙ.

- Ҡәзә кәбеҫтәһе, йыуа...

- Йә инде, ятма...

Мәгәр Зәйнәп ҡалҡынырлыҡ хәлдә түгел ине. Кәүҙәгә барыһынан да ҡалынырак, буйға оҙонораҡ Сәғирә ергә һуҙылып ятты ла, аҫҡа һонолоп, асырғанып ҡысҡырҙы:

-Ҡулыңды бир! Бир, тим мин һиңә!

Әхирәте әллә ни ынтыла алманы. Сәғирә нығыраҡ һуҙылғайны, үҙе башы менән ҡәбергә барып төштө. Әммә ыһ та итмәй тороп, Зәйнәпте тартҡылап, сүкәйтеп булһа ла ултыртты. Күтәреп ҡарағайны, булдыра алманы. Быуынһыҙ кеше нык ауыр икән шул.

- Ҡыҙҙар, шәлдәрегеҙҙе һалып, ялғағыҙ! - тип фарман бирҙе Сәғирә.

Шәл бау менән Зәйнәптең биленән уратып бәйләне лә, осон ҡыҙҙарға һондо һәм үҙе бар көсөнә әхирәтен өҫкә этте:

- Тартығыҙ! Әйҙә, әйҙә, әйҙә...

* * *

Зәйнәптең нурлы йөҙө һарғайған, кәүҙәһе ҡурай һымаҡ кипкән, еңел генә булып ҡалған өләсәһен гүргә һалғас, Сәғирә алты саҡырымда ятҡан Ҡаратауға күмәк хужалыҡ идараһына йәйәүләне. Эшен атҡарғансы, ҡараңғы ла төштө. Арып, арманһыҙ булғайны, йығылыр хәлгә еткәйне. Шуға ла нәҫел тейеш апайҙа ҡуна ҡалды. Мәтрүш сәйен һемергәс, үлек кеүек йоҡоға талды. Иртәнсәк кейенәйем тиһә, берҙән-бер күлдәге лә, сөйҙә эленеүле көпөһө лә юҡ.

- Бына тағы башҡа бер ҡаза, - тине хужабикә көрһөнөп. - Ишекте элмәй ятҡанмын шул, хәйерсе. Сихырсы Шәмсинур ҡарсыҡҡа өндәшмәй булмаҫ. Беҙҙән өс өй аша ғына тора ул. Ҡана, йәһәт кенә барып киләйем.

Әштер-өштөр итеп, әпсентөпсөн әйтеп, ап-аҡ сәсле әбей килеп инде. Һикелә сепрәк бөркәнеп ултырған Сәғирәнең йөҙөнә баҡты ла:

- Балам, һин әллә Сәлих хәлфәнең ҡыҙымы? - тип һораны.

- Эйе, Шәмсинур әбей.

- Затлы нәҫел, аҫыл ир. Халыҡты белемгә әйҙәүсе изге йәнгә халыҡ дошманы тигән ғәйеп таҡтылар нахаҡҡа. Ҡуй инде, ҡуй...Хоҙай Тәғәлә сабырлыҡ бирһен үҙегеҙгә. Ҡалғандарға йәшәү фарыз, тормош дауам итә, балам.

- Рәхмәт! Тик бына яланғас ҡалдым.

- Борсолма, ҡыҙым, баш һау булһа, кейем табылыр. Анау Аҡһаҡ Һарундың ғына эшелер?.. Иманын уҡытайыҡ әле беҙ ул уғрының. Апайыңдың көпөһөн кей ҙә, ауыл осондағы балсыҡ сығарған соҡорға барып әйлән. Унда ерләнмәгән мәйеттәр ятыр. Уларҙы этме, бүреме тартҡыслаған. Шунан тарамыш алып кил. Ҡурҡма, ер ирегәс, үлектәрҙе ер ҡуйынына бирерҙәр.

Сәғирә, ҡото алынһа ла, баш тарта алманы, ҡушҡанды үтәне. Сихырсы мейес алдында сыра тоҡандырҙы ла, әкиәт батыры кәрәк саҡта ҡылын өтөп атын саҡырған һымаҡ, ниҙер һамаҡлап, тарамышты утҡа тотто. Күптә үтмәй, тыны бөтөп, ҡобараһы осоп, уғыры килеп керҙе. Үҙе, ҡулдарын һуҙып, ялбара:

- Харап ҡына итмә инде, Шәмсинур апай! Зинһар, харап итмә! Күлдәген дә, көпөһөн дә хәҙер үк ҡайтарып бирәм. Башҡа кеше әйберенә ҡағылмам...

Һуғыш бөтөр саҡта ғына ҡара ҡайғыға һалып, өсмөйөшлө хат килде: "Улығыҙ, туғаныгыҙ март айынан минең менән бергә һуғышта булды. Алышҡа ингәндә бер-беребеҙгә адрестарыбыҙҙы бирештек, кем иҫән ҡалһа, шул хат яҙыр тип. Ун өсөнсө апрелдә уны дошман снайперы һәләк итте. Бик яҡшы егет ине Йәүҙәт. Вена ҡалаһына етергә күп тә ҡалмағайны. Австрияла бейек тау итәгендә ҡәбер ҡаҙып, һәйбәтләп ерләнек. Улығыҙҙы наградаға тәҡдим иткәйнеләр. Ҡыйыу һуғышҡан өсөн орден бирергә тейештәр ине. Уны ошо адрес буйынса юллап алырға кәрәк: Полевая почта, 71293Т. Мин үҙем Яңауыл районынан. Улығыҙҙы ерләгәндән һуң ике көн үткәс, яраландым. Әле госпиталдә ятам. Хушығыҙ! Гвардеецтар сәләме менән Барый Абраров. 18 апрель, 1945 йыл."

Сәғирә лә, инәһе лә, башҡа туғандары ла нык өҙгәләнде. Бөркөт сөйгән сая егеткә ниңә генә йәнтөйәгенә әйләнеп ҡайтырға насип булманы икән?.. Тыуған иленән ҡоштар осоп етмәҫ ерҙә исемһеҙ-ниһеҙ яңғыҙ яталыр. Ҡәбере ҡайҙа икәне лә билдәһеҙ...

Сәғирә, ҡарсыҡ булғас та, ағаһын ун һигеҙ йәшлек егет итеп иҫләй, тере һымаҡ күҙаллай, уның төҫ-ҡиәфәтен үҙ улында күрә, Йәүҙәт ағайым ҡайтҡан да баһа, тип ҡыуана. Эй, хәтер... Хәсрәтле хәтер...

* * *

Ҡайҙалыр сәфәр ҡылыу, кемдәрҙелер күреү тураһында Сәғирә ҡарсыҡ асыҡ зиһен менән аныҡ ҡына уйламай, әлбиттә, Ниндәйҙер сихри көс уны әле әҙәм заты төшөнмәгән илаһи ҡөҙрәт менән билдәһеҙлеккә тарта. Йән тартмаһа, ҡан тарта, тигән кеүек. Әллә асыһын да, сөсөһөн дә бергә татыған, йәш саҡта ебәк булып ишелгән Әғләменең рухымы?.. Бәлки, хәләленең иҫһеҙләнеп йөрөүен күктән күрәләр, уны йәлләп, аҙап-ғазаптан азат донъяға саҡыралыр? Оҙаҡ, хәтһеҙ оҙаҡ ҡартын күргәне, уның менән күңеле бушағансы рәхәтләнеп һөйләшкәне юҡ.

Көн ҡыҙыуы хәлде бөтөргәс, манма тиргә төшөргәс, балаСағалар һыу инергә китте, ҡарсыҡ бер аҙға яңғыҙы тороп ҡалды. Ҡапыл ғына ул тынысһыҙланды:

- Мин бында хушланып ағас күләгәһендә ултырам, ә Әғләм янып-бешеп, арып-талып көтөү көтәләр. Тамағы кипкәндер, сарсағандыр, сәй эскеһе киләләр...

Йәһәт кенә өйгә инеп, Сәғирә ҡарсыҡ шешәгә сәй ҡойҙо, шәкәр ҡомо һалып болғатты, икмәк телеп, май һыланы, был шөғөлөнән ләззәт кисерҙе. Шунан төйөнсәген тотоп, аръяҡҡа, борондан мал утлаған урынға, атлыҡты. Ҡайын араһындағы ҡалҡыулыҡта ҡыҙарып бешкән еләктәрҙе шәйләп, эреләрен өҙөп ҡапты, ҡартына тип, бер-нисә тәлгәш тә алды. Шул саҡ инәһенән ишеткән, инде онотолоп бөткән бер йыр үҙенән-үҙе теленә килде:

*Их, дуҫҡайым, еләк аша,*
*Һарына ашағансы.*
*Их, бер күреп һөйләшергә,*
*Эстәрем бушағансы.*
*Ҡулымдағы балдағымдың,*
*Ҡалды бер ҡашы ғына.*
*Сер сисергә юҡ серҙәшем,*
*Был башым яңғыҙ бына.*

Тау битләсенә һибелгән малтыуар күҙенә салынғас, эҙләүсе күптән юғалтҡан әйберен тапҡандай, ифрат нык ҡыуанды. Тана-торпо утлап йөрөй, бәҙзе һыйырҙар көйшәп ята. Мал - ауыл ерендә күңелгә рәхәтлек биргән ырыҫ-ҡот, ырыҫ-бәхет. Мәгәр әле ошо ырыҫ-дәүләтте һаҡлаусы ғына күренмәй.

- Әғләметдин! Һин ҡайҙа? Һин ҡайҙа?..

Тауышҡа үлән араһынан берәү килеп торҙо. Бәй, бөтә ауыл төн уртаһында ла танып белер һармаҡ Һаҙый ҙа баһа.

- Улым, Әғләм бабайың ҡайҙа? - тип һораны Сәғирә ҡарсыҡ. - Көтөүгә киткәйне лә, ризыҡ алып килдем бына.

- Әғләм бабай юҡ шул бында. Элек көтөүҙе күп көттө инде. Хәҙер анауында, ҡарт ағастар араһында, ял итеп ята, - тип, сауыллыҡҡа бармаҡ төртөп күрһәтте һармаҡ. - Көн һайын иртәнсәк таштар араһынан ҡарап ҡала мине.

-Бигерәк шөкәтһеҙ урын. Бабайым шишләп ята икән бында, өйгә ҡайтмай, - тип, үҙ алдына һөйләнде Сәғирә ҡарсыҡ. - Әғләметдин! Әғләметдин!.. Исмаһам, тауыш та бирмәй, шымаҡай...

Эҙләй торғас, эсенән әҙәмдәр баҡҡан һынташтар янына барып сыҡты. Береһенән, кеше оҙонлоғо ҡара таштан, серле генә итеп Әғләметдине ҡарап тора. Тап үҙе! Уның һыны, ҡарашы! Шаҡ ҡатты Сәғирә ҡарсыҡ. Ошо урында ер упҡан тигәндәй, ҡартын таш йотҡан да баһа, әстәғәфирулла тәүбә! Нисек кенә итеп ҡотҡарырға уны? Нисек? Таш эсендә тороп, йонсоғандыр, асыҡҡандыр. Былай әллә ни арығанға оҡшамаған оҡшауын. Сәғирә ҡарсыҡ ҡартына тәлгәш-тәлгәш еләген, майлы әпәйен, сәйен һондо. Мәгәр ҡарты тағәмен алманы.

- Әғләметдин, сыҡ таштан, сыҡ! - тип саҡырҙы. - Мине күрмәйһеңме ни? Яңғыҙлыҡтан тамам туйҙым бит, ялҡтым бит. Аҙыраҡ йәлләмәйһең дә мине.

Ҡарсыҡ әҫәрләнеп, ҡасандыр тиң күргән, иш иткән ҡушының сәсенән, битенән һыйпамаҡсы итте, усы һынташтың ҡыҙыуын ғына тойҙо.

-Әғләметдин, әллә ауырыйһың инде, маңлайың ҡалай эҫе...

Һынташ ҡыймылдағандай тойолдо, ҡарсыҡтың зиһененә иһә ҡартының сихриәтле тауышы яғылғандай булды:

- Сәғирә, һин шуны бел: бер йән үлмәй, бер йән тыумай. Үҙем фани донъянан китһәм дә донъялыҡта улдарым, ейәндәрем ҡалды, атым да, затым да юғалманы. Минең дауамым - балаларҙа...

- Миңә үҙең кәрәк, үҙең! Сыҡ таш ҡыуышынан! - тип ялбарҙы Сәғирә ҡарсыҡ.

Мәгәр һынташ башҡаса ҡыймылдаманы ла, һелкенмәне лә, бабайы ла сыҡманы. Сәғирә ҡарсыҡ асырғанып тораташтың төйөргә тотондо:

- Ярыл, таш! Ярыл!..

Ғәлиә менән Тәлғәт уны юллап, зыяратта тапҡанда, Сәғирә ҡарсыҡ тораташтың ҡосаҡлап: "Әғләм, бергә булайыҡ. Сыҡ таш эсенән!" - тип, һаман да һыҡтай, һулҡылдай ине.

**(Дауамы бар).**

*ИЖАДХАНА*

**Ш. Бабич исемендәге Республика дәүләт йәштәр премияһы лауреаты, композитор Юлай Үҙәнбаевты "Устарыма һал һин йөрәгеңде", "Аҡсарлаҡ", "Йылғалар төнөн һөйләшә" кеүек популяр йырҙар авторы итеп тә, республика театрҙары сәхнәһендә барған спектаклдәрҙе музыкаль яҡтан биҙәүсе булараҡ та яҡшы беләһегеҙ. Моңло йырҙары башҡорт донъяһында гел яңырып торһа ла, композиторҙың үҙе йыш ҡына тамашасы күҙенән ситтә ҡалыусан була. Шуға ла бөгөн Юлай Хәмит улын ҡунаҡҡа саҡырып, ижады, киләсәккә пландары, ғөмүмән, тормошҡа ҡарашы тураһында һөйләштек.**



# МОҢЛО ХАЛҠЫМ ӨСӨН...

## йырҙар яҙыу үҙе бер киңәнес

### Ғүмер үрҙәрҙән тора

Бәләкәй саҡтан гармунда уйнап үҫтем. Ағайҙарым төнө буйы гармунды киске уйында йөртә лә, таңын ғына ҡайтып, йоҡларға ята, ә мин был ваҡытта йоҡонан тороп, шул йылы ғына гармунды алып уйнарға өйрәнә инем. Беҙ үҫкән саҡта Ағиҙел буйы ярында таҡта түшәп, йәштәр шунда бейей ине, һуңғараҡ бейеү көйҙәрен һыҙҙыра башлағас, ағай-апайҙарым мине лә киске уйынға гармунда уйнарға алып сыға башланы.

Бик хыялый бала булып үҫтем, һыу аҫты донъяһы шул тиклем ҡыҙыҡһындыра торғайны. Бер тапҡыр шулай противогаз кейеп, Ағиҙелде аша атлап үтәм, тип, саҡ батмай ҡалдым. Гел бер үҙем тәбиғәт ҡосағында, йылға буйында йөрөй торғайным, яр буйында аҡсарлаҡтарҙы күҙәтергә ярата инем. Тәнзилә апайым минең хисле күңелемде күрептер инде, Өфөгә уҡырға алып килде. Олатай-өләсәйҙәр моңло йырсы булған, тиҙәр, мин уларҙы күреп өлгөрмәнем. Яныраҡ "Ауылыма ҡайтам" тигән тапшырыу менән тыуған ауылым - Мәләүез районы Смаҡ ауылына ҡайтып килдек. Революция ваҡытында Мөхәмәтша Буранғоловтар, барыһы бергә ете ғаилә килеп, беҙҙең ауылда йәшәгәндәр. Мөхәмәтша бабайҙа уҡыған олатайҙар иҫән саҡта уларҙан был турала һөйләтеп ҡалдырыу тураһында хыялланып йөрөй инем. Ошо тарихты һөйләтеүҙән шул тиклем күңелем булды.

Әйткәндәй, үҙемде композитор тип атауҙарына оҙаҡ өйрәндем. Хәҙер инде төрлө сәхнәләрҙә байтаҡ йырҙарым яңғырай, йөрәгемдә тамашасыға еткерер һүҙем тулышты, шуға үҙемдең концертымды ойошторорға булдым. Ғүмеремдең ниндәйҙер бер өлөшө үтте, тамашасы алдында яуап тотоп, уларҙың баһаһын алғым килә. Ошонан һуң икенсе үрҙәрҙе яуларға тотонорға торам.

### Һүҙ мәғәнәһе менән көслө

Бер ҡасан да йыр яҙам, тип авторҙар эҙләп йөрөмәйем, Хоҙай һәр береһен үҙе алдыма сығара. Бер генә миҫал. Баймаҡта йәшәгәндә эшкә китеп барһам, юлда китап бите ята, кемдер йыртып ташлап киткән. Алып уҡып ҡараным, тойғолорҙы тәбиғәт менән нескә итеп сағыштырыу оҡшаны. Был китап битен кеҫәгә һалып алдым, тағы сығарып уҡыным, кире һалып ҡуйҙым. Шулай "Йылғалар төнөн һөйләшә" тигән йыр тыуҙы. Ике-өс йыл үтте, Сибайға эшкә барғас ҡына уның Мостай Кәрим һүҙҙәренә яҙылғанлығын әйтте коллегалар.

Ниндәйҙер шиғырға көсләп көй яҙҙырырға маташҡандарын яратмайым, яҙмыш үҙе алдыма килтереп һалған текстарға көй уңышлыраҡ килеп сыға. Ҡатын-ҡыҙҙар шиғриәтен яратам, уларҙың шиғырҙарында лирика көслөрәк, сөнки улар беҙгә ҡарағанда аҡыллыраҡ та, ихлас ярата ла беләләр. Ир-егет һәр ваҡыт бала булып ҡала, ә ҡатын-ҡыҙ - донъя тотҡаһы. Киң фекерләгән шағирҙарҙы яратам, алдан әйткәнемсә, һүҙҙәр матур ғына түгел, мәғәнәле лә булырға тейеш. Йырҙа ниндәйҙер ваҡиға, яҙмыш, хатта бәләкәй генә драма ятырға тейеш. Ул ябай ғына булыуы ихтимал, әммә тәрәнлеге менән тыңлаусының күңел ҡылдарын тирбәтә ала икән, бына был - уңыш.

### Лирик композитор мин

Оҙаҡ йылдар Сибай дәүләт драма театры, Башҡорт дәүләт академия драма театрында эшләп, күп спектаклдәр өсөн дә йырҙар яҙҙым. Спектакль - ул тормош. Унда драматург яҙған бер ваҡиғала булған бөтөн кисерештәрҙе музыка менән бәйләп алып барырға кәрәк. Былың өсөн бер йыр ғына яҙмайһың, төрлө тауыш эффекттарын эшләйһең, трагик мәлдәрен тойорға һәм сағылдырырға тейешһең. Пьесаны уҡыйһың, уны эстән кисерәһең, етмәһә, моң режиссерҙың уйҙары менән тап килергә тейеш. Шул саҡта ғына яҡшы спектакль килеп сыға. Спектакль үҙенең иң тулҡынландырғыс мәленә еткәндә, шул мәлде йыр менән тәьҫирләндереп ебәрһәң, тамашасының күҙҙәренән йәш атылып сыға. Сибай театрында Т. Ғарипованың "Китмәгеҙ, торналар!" спектакле ун йыл тиреһе бара, репертуарҙан алырға халыҡ юл ҡуймай, шул тиклем яраталар. Башҡорт дәүләт академия драма театрында "Хушығыҙ, хыялдарым" спектакле уңышлы булды. Йырсы актерҙарҙан да ундым, гел генә моңло тауышлы актерҙарға әләкте йырҙарым, был яҡтан мин бик уңышлы композитор. Ҡайҙа ғына йөрөмәйем, кешеләрҙең телефондарынан минең йырҙар ағылып китә, тимәк, яраталар, оҡшаталар, тыңлайҙар. Тимәк, моң кешенең күңеленә үтеп инә алған.

Тәбиғәтем менән лирикмын, лирик әҫәрҙәрҙе "йөҙөп" эшләйем. Әммә спектаклгә йыр яҙыуы еңел түгел, ул ижад итеүгә ҡамасаулай, йыллыҡ йырҙарыңды һурып ала. Шуға ла әлеге мәлдә телевидениеға эшкә күстем, ижадҡа күберәк ваҡыт бүлергә уйлайым.

### Моң мәңгелек был тормошта

Һуңғы мәлдә донъя бысраҡ менән тулды, кешеләр күңелендә йылылыҡ юҡ, бер-береберҙең хис-тойғолары менән иҫәпләшмәйбеҙ, кешенең күңелен аямайбыҙ һәм быларҙың барыһына ла өйрәнә барабыҙ, шуныһы үкенесле. Эстраданы мәғәнәһеҙ йырҙар баҫа башлаған ваҡытта тәүҙә ҡәнәғәтһеҙлегебеҙҙе белдерә инек, хәҙер был йырҙарҙа ла ҡолаҡ күнекте. Көн һайын, бер туҡтауһыҙ яңғырап торғас, кеше эргә-тирәһендәге аламалыҡҡа өйрәнгән кеүек, үҙе лә һиҙмәҫтән ошо көйҙәргә һикереп бейей башлай. Әммә был ваҡытлы күренеш, йәштәр әле үк моңға кире әйләнеп ҡайта башланы. Әлегә был йырҙар уларға адреналин бирә, улар тап ошо йырҙар менән донъяға ҡарашын сағылдыра. Нимә генә булмаһын, донъяла матурлыҡ гел өҫкә ҡалҡып сыға, халыҡ уны үҙе тартып сығара, күңелендә ҡалдыра. Бөтә быуаттарҙа ла, бөтә ваҡытта ла был шулай булған.

Кешелә битарафлыҡ көслө булғанғамы икән, йылмайыу ҙа һирәк арабыҙҙа. Мин үҙем йылмайырға яратам, был алйот нинә йылмая икән, тип уйлаусылар барҙыр. Гел эстән нимәлер йырлап йөрөйөм, шуға ауыҙ йырлып та китәлер инде, күңелдә нимәләр тулышып йөрөһә, йылмаяһың бит ул. Шуға ла йылмайып йәшәгеҙ, күңелегеҙ бер ҡасан да буш булмаһын.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ижадын яратыусыларҙы Юлай Үҙәнбаев 14 апрель көнө Милли йәштәр театрында үҙенең 25 йыллыҡ ижадына арналған шәп концерт-тамашала көтөп ҡала. Унда композиторҙың ижадташ дуҫтары ҡатнашасаҡ.**

**Ләйсән НАФИҠОВА**
**әңгәмәләште.**

*ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ*

# АУЫЛ ХАЛҠЫ ЯЛҠАУМЫ?

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишерелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



**Спартак ИЛЬЯСОВ, яҙыусы:**

- Ауыл кешеһе булараҡ, мине айырыуса ауылдарыбыҙҙың яҙмышы әсендерә, уларҙың киләсәге хәүефләндерә. Ҡыҙғаныс, XXI быуатта ла ҡала һәм ауыл шарттары - ер менән күк араһы. Ниндәй генә дәүләт короло шо хөкөм һөрмәһен, беҙҙең илдә борон-борондан ҡала халҡы ауылды эксплуатациялап йәшәгән. Ул шуға өйрәнгән, шуның өсөн берләшкән. Быға миҫалдар бик күп. Мәҫәлән, ҡар яуҙы, ти. Иртән тороуына ҡала кешеһенең өй алдындағы ҡарҙы көрәп тә ҡуйлар. Көрәү генә түгел, кеше тайып йығылмаһын өсөн боҙло ергә ҡом да һибеп ҡуйлар. Ауылда яңғыҙ көн күргән ҡарт әбейҙең йорт ҡапҡаһы алдын кем таҙарта? Ул көрткә батып тайып йығылып ятһын - берәү ҙә ҡайғырмай. Ә ҡала менән ауыл пенсионерының хоҡуҡтары тиң түгелме ни һуң? Тимәк, дәүләт халыҡҡа бер тигеҙ ҡарамай. Йәки икенсе миҫал. Ниндәй кен түрәгә барып инмә, бүлмәһендә көпә-көндөҙ биш-алты лампочка янып тора. Ә беҙҙә һаман утһыҙ йәшәгән ауылдар бар. Шул уҡ ваҡытта ҡала халҡы шул ауыл кешеһе үҫтергән ризыҡтан туҡлана. Бөтәһенең дә һөт эскеһе, ит ашағыһы килә. Әммә ауыл ҡарауһыҙ.

Ауыл халҡы эшләргә теләмәй, ул ялҡау, тигән фекер менән бөтөнләй килешмәйем. Ауылда бер кем дә ялҡау түгел, бөтәһе лә эшләргә тырыша. Ләкин бының өсөн уларҙың шарттары юҡ. Шул уҡ транспорт проблемаһы кәртә булып тороуы ихтимал. Ҡала эсендә минут һайын автобус йөрөп тора. Ә минең ауыл аша, мәҫәлән, район үҙәгенә көнөнә бер генә автобус үтә. Бындай осраҡта ауыл кешеһе ҡалаға нисек эшкә урынлашһын? Былтыр уңыш ныҡ унды. Әммә ауыл халҡы үҫтергән йәшелсәне, картуфты алыусы юҡ, улар келәттәрҙә, баҙҙарҙа серепята. Дәүләт был осраҡта ниндәйҙер сара күрергә тейеш ине бит. Фермерлыҡ хужалығын үҫтерергә тырышалар. Әммә фермерға ла, шәхси хужалыҡтарға ла баҙарҙа урын, сауҙа итеү мөмкинлеге юҡ, дәүләт тә уларҙан бер нәмә лә һатып алмай. Һөҙөмтәлә ауылдағы етештереүсе түгел, ә ҡала спекулянты байый. Шуға күрә ауыл кешеһен ғәйепләргә ярамай. Бөтә бәлә - хөкүмәттең ауылды ҡарарға, үҫтерергә теләмәүендә.

Ауыл үҙ хоҡуҡтары өсөн көрәшергә тейеш, әлбиттә. Ҡыҙғаныска ҡаршы, ауыл халҡы сәйәсмән түгел. Законды белеп эш итһән, барыбер ҡайһы бер мәсьәләләрҙе хәл итеп була. Әйтәйек, ауылға ҡараған ер биләмәләре урындағы хакимиәт тарафынан һатыла. Әммә Конституцияла асыҡ-тан-асыҡ, ер шул урында йәшәүсе халыҡтың милке, тип яҙылған. Ауыл халҡы ошо законға таянып күтәреләп сыҡһа, күпме ерен һаҡлап алып ҡалыр ине. Үкенесле, урындағы хакимиәттәрҙә күбеһенсә илһөйәрлек тойғолары булмаған чиновниктар ултыра шул. Үҙ тәйеген һөйгән түрә бер ҡасан да ерҙе ситкә һатмай ул.

**✓ *Был дауалау ысулының әһәмиәте хәрәкәтһеҙ ҡалып ҡата башлаған ҡанды сығарып, урынына яңы ҡан барлыҡҡа килтереүгә бәйле. Хиджаманы һау кешеләр ҙә яһата, сөнки ҡан яңырыуы тәндә оҙаҡ ваҡыт ҡартаймай һаҡларға ярҙам итә.***



*ИНТЕРНЕТТАН*



# МАТЕМАТИКАНАН ҠУРҠЫУ...

## шулай уҡ фобия

■ Кешене төрлө бактериялар уратып алған. Уларҙың һаны миллионға етә, ти белгестәр. Әле беренсе саң һурҙырғыс уйлап табылғанға тиклем үк, 18-се быуатта шотланд табибы Джон Хантер: "Саң дарыға ҡарағанда күберәк кешене һәләк итте", - тип белдерә. Ул ваҡытта табипҡа ышаныусылар күп булмаһа ла, бөгөн бының дөрөҫлөгөн белгестәр дәлилләгән инде. "Беҙ микробтар араһында йәшәйбеҙ һәм уларҙың нигеҙен үҙебеҙҙең микроорганизмдар алып тора, - ти тикшеренеүҙәр авторы, Йель университетының экология кафедраһы доценты Джордан Печиа. -Барыбыҙ ҙа йортта-рыбыҙҙы һирәк йыйыштырабыҙ, әммә унда әүҙем тормош алып барабыҙ, мәҫәлән, спорт менән шөғөлләнәбеҙ, шуға ла иҙәнгә йыйылған саң өҫкә күтәрелә һәм беҙ бактерияларға "байыған" һауаны һулайбыҙ". Шулай уҡ кеше үҙе әйләнә-тирәһенә һәр сәғәт һайын 37 миллион бактерия "өҫтәп" тора, ти тикшеренеүселәр. Бүлмәләге һауаны тикшереп ҡарағандан һуң, унда йышыраҡ осраған 15 төргә яҡын бактерияларҙың дүртәүһе кеше тиреһендә осраған бактериялар төрөнә ҡараған. Шуға ла саңды йышыраҡ һөртөргә һәм бүлмәне елләтергә кәрәк.

■ Лекция йәки дәрес ваҡытында уҡытыусыны тыңлай алмай йоҡлап китһәгеҙ, быны өсөн борсолорға кәрәкмәй, ти Нотр-Дам университеты ғалимдары. Ниндәйҙер мәғлүмәт алғандан һуң йоҡлап алыу кешегә был мәғлүмәтте хәтерендә нығыраҡ һаҡларға ярҙам итә. Шуға ла имтиханға йоҡлар алдынан әҙерләнергә кәрәк. Ғалимдар был теорияны 208 студентта тикшереп ҡарағандан һуң, яңы мәғлүмәт алғандан һуң йоҡларға ятыусылар күпкә яҡшыраҡ уҡыуын иҫбатлаған. Бына шуның өсөн дә йоҡлар алдынан дәрестәрҙе ҡабатлап алыу кәңәш ителә лә инде.

■ Стэнфорд университетының медицина мәктәбе үткәргән тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, математиканан насар өлгәшкән уҡыусыларҙың баш мейеһе ҡурҡыуҙан башҡасараҡ эшләй икән. Ғалимдар әйтеүенсә, математика фәне алдындағы ҡурҡыу феномены 50 йыл элек билдәле булған, әммә быға тиклем белгестәр ни өсөн ҡайһы бер кешеләрҙең математиканы яратмауын асыҡларға тырышмаған. Нейробиология күҙлегенән ҡарағанда, математиканан ҡурҡыу тәбиғәте менән башҡа ҡурҡыуҙарға оҡшаған. Икенсе төрлө әйткәндә, ҡурҡыу тойғоһо мейенең мәғлүмәтте эшкәртеү һәләтен түбәнәйтә.

■ Америка тикшеренеүселәре асыҡлауынса, эштәге уңыштар бәхетле тормоштоң нигеҙе булып тора алмай. Нотр-Дам университеты эргәһендәге Мендоза бизнес мәктәбе ғалимдары 70 йыл дауамында 717 һәләтле кешенең тормошон күҙәткән һәм уларҙы 5 төп өлкә: эш, ғаилә тормошо, ял, сәләмәтлек һәм "тормош килтергән шатлыҡ" буйынса ҡәнәғәтлек кимәлен тикшергән. Амбициялар кимәле уларҙан һорау алыуҙар ярҙамында асыҡланған. Университеттың профессоры Тимоти Джадж әйтеүенсә, амбициялы кешеләр матди планда уңышлыраҡ булған, әммә быға ҡарамайынса, улар үҙҙәрен "ялҡауҙар"ға ҡарағанда саҡ ҡына бәхетле тойған һәм уларҙың ғүмер оҙайлығы башҡаларҙыҡынан айырылмаған. Ә бына амбициялы булып та карьераһы килеп сыҡмаған уҙҙәрен бөтөнләй бәхетле иҫәпләмәгән.

*ХӘТЕР ЯҢЫРТЫП*

**Сүп-сар, сыбыҡ-сабыҡ эркелеп быуылып ятҡан инеш-шишмәләрҙе күргәнегеҙ бармы? Был осраҡта быуылып ятҡан ерҙәге һыу боҙола, еҫләнә башлай. Ҡулыңа таяҡ алып, шишмәнең был өлөшөн таҙартыуың була, ул һиңә үтә күренмәле сафлығы менән рәхмәт әйтеп, артабан сылтырап ағып китә. Ә бит, төптән уйлап ҡараһаң, кеше организмы ла шул уҡ шишмәгә оҡшаған...**

# ХИДЖАМА - халыҡ дауаһының бер ысулы



### Ҡартатайым ҡан алып дауалаған

Атайым һәм уның бер туған апаһы Нурия инәйем һөйләүенсә, ҡартатайыбыҙ Халис кешенең ҡанын ағыҙып дауалар булған. "Атайыбыҙ сирле кешене сисендереп, ауыртҡан еренең ҡан тамырын табып, шунан тамыр буйлап арҡаһына тиклем юлллатып, шул урындан ҡанын ағыҙа торғайны. Уға килгән ауырыу кеше һауығып, һыҡыр кеше - күҙе асылып, һаңрау - ишетеп, аҡһағы таяғын ташлап ҡайтып китер ине. Ҡан ала торған ҡоралы резинка тағылған сиртмәле бысаҡ рәүешендә ине. Атайыбыҙ үлгәндән һуң был ҡоралы беҙҙең өй эсендә һаҡланды ла, аҙаҡ ҡайҙалыр юғалды", тип иҫләй инәйем ҡартатайыбыҙҙың был шөғөлө хаҡында. Ә атайым әйтеүенсә, ҡартатайыбыҙ ҡан ағыҙыу ҡоралдарын алып, ҡыш урталында ҡаҙаҡ далаларына сығып китер булған. Ауылға яҙ еткәс кенә әйләнеп ҡайтҡан ул. Ҡайтҡанында ла ни рәүешле ҡайтҡан бит әле: пар ат егелгән арбаға йә санаға күп итеп таныҡ аҙыҡ-түлек, ҡатындарына һәм балаларына, башҡа туғандарына кейем-һалым, башҡа төрлө тормош кәрәк-яраҡтары тейәп ҡайтҡан ул. Һаҡмарҙы быуып яһаған һыу тирмәне таштарын да ул Ырымбурҙан ошо рәүешле алып ҡайтҡан. Уның ҡайтыуын өйҙәгеләр һәм туғандары байрам көткәндәй көтөп торор булған.

Шулай итеп, ҡартатайыбыҙ кешене һауыҡтырып, үҙенсә кәсеп итеп йәшәгән. Уның был һөнәргә кемдән һәм ҡасан өйрәнеүен, ҡан алыуҙы ни рәүешле башҡарыуын, өлкәндәрҙән күпме генә һорашһам да, белә алманым. Шуға күрә был туралағы һәр бер мәғлүмәт минә мөһим булды. Әйтәйек, ололарҙан ишеткән буйынса башҡорттар ҡан ағыҙғанда малдың мөгөҙөн йә балсыҡтан яһалған көршәктәрҙе файҙаланған, тигән мәғлүмәт тә минең өсөн бик мөһим булды. Шул уҡ ваҡытта студент саҡтан уҡ үҙем бик әүҙем донор булараҡ, ҡан биргәндән һуң аппетиттың яҡшырыуына, үҙемде яҡшы тоя башлауыма иғтибар итеп, халҡыбыҙ медицинаһында борондан ҡулланылған ҡан ағыҙып дауалау ысулының һөҙөмтәле икәнлегенә шигем ҡалмағайны.

### Баҡтиһәң...

Мин оҙаҡ йылдар белергә теләгән халыҡ медицинаһының ташы быуаттан бирле килгән был дауалау ысулы ғәрәп телендә хиджама тип атала икән. Тамыры "әл-хиджам" - "һурыу"ҙан алынған. Тибет, Ҡытай, Ислам дине медицинаһында ла был ысул киң таралған булған. Һөләк һалып дауалау ҙа хиджама кеүек үк кешенең ҡан тамырҙарында ойоған һәм бысранған ҡанды һурып алыуға бәйле. Тик хиджамала ҡанды һөләктәр түгел, ә махсус медицина банкалары ярҙамында һурып сығаралар. Һөләк һалыуҙың да, хиджаманың да үҙ өҫтөнлөктәре бар. Әйтәйек, һөләк ҡанды һурып ҡына ҡалмай, был осраҡта ул ҡанды һурыуы енел булһын өсөн уны шыйығайтыу маҡсатында етмешкә яҡын төрлө ферменттарын ҡан тамырҙары буйлап ебәрә. Был ферменттар ҡан тамырҙарын һығылмалы итеп, инсульт, инфаркт ауырыуҙарын иҫкәртеүсе ролен үтәй. Ә инде ҡанды вакуум ярҙамында техник юл менән һурыуға бәйле хиджамаға килгәндә, бында ҡанды тәндең төрлө урындарынан күберәк итеп һурып, тиҙерәк һауығыу мөмкинлеге бар. Беҙҙең халыҡта ла борон-борондан ҡулланылған дауалауҙың был ысулдары, уларҙы ҡартатайымдың яҡшы белеүе, тимәк, юҡтан түгел.

Бирәм тигән ҡолона сығарып ҡуйыр юлына, тигәндәй, бер саҡ редакциябыҙға күптәнге дуҫыбыҙ Әҙһәм Нигмәтов Фидан Ишемғолов атлы егетте эйәртеп килеп инде. Егет үҙе Ейәнсура районының Ҡужанаҡ ауылында тыуып үҫкән, шәхси эшҡыуарлыҡ менән шөғөлләнә, бер үк ваҡытта кешеләргә ҡан ағыҙып дауалау сеанстары ла үткәрә. Уға был һөнәрҙе ғәрәптәр өйрәткән, Фидан ике йыл ярым ваҡыт эсендә һиҡһәндән ашыу кешене дауалаған, уларҙың утыҙҙан ашыуына бер нисә тапҡыр хиджама эшләгән.

Ҡан ағыҙып дауалау ысулы хаҡында күптән ҡыҙыҡһынып йөрөгәнгә күрә, Фиданға "тәжрибә ҡуяны" ролен үтәр кешене табыу ҡыйын булманы. Мин был ролгә шундуҡ риза булдым. Әйтергә кәрәк, серәкәй тешләгән һымаҡ та булманы минең өсөн хиджама, ҡытыҡ килгәненә генә түҙеүе ҡыйыныраҡ. Хиджама эшләтер өсөн талап ителгән төпшарт: ике тапҡыр инсульт йә инфаркт кисергән кешегә уны эшләргә ярамай һәм процедура алдынан ике сәғәт буйына ашамаҫҡа-эсмәҫкә генә кәрәк.

### Һау кешеләр ҙә яһата...

Әнәс ибн Малик: "Мөхәммәт бәйғәмбәр дауалауҙың һеҙ файҙаланырға мөмкин булған иң яҡшы ысулы - ҡан ағыҙыу", тип әйтеп ҡалдырған. "Дауалау өс ысул: бал ашау, бысаҡ менән ҡан алыу һәм ут менән көйҙөрөү (тәндәге кардиналь нөктәләрҙе үләндән яһалған тәмәке ярҙамында ҡыҙҙырыу - **Ә.Ғ.-Ү.**) менән башҡарыла", - тип тә әйтелә бер хәҙистә. Ғөмүмән алғанда, Ислам медицинаһының айырылғыһыҙ бер өлөшө ул хиджама. Ат Тирмизи яҙып ҡалдырыуынса, Мөхәммәт бәйғәмбәр хиджама өсөн иң уңайлы көндәр итеп айҙың икенсе яртыһын, атап әйткәндә 17-се, 19-сы, 21-се көндәрен һанаған. Мөхәммәт бәйғәмбәргә Әбү Тайиби атлы табиб хиджама яһар булған. Дауыт бәйғәмбәр иһә, аҙнаның шишәмбе көнөндә хиджама яһауҙы бөтөнләй тыйған, сөнки тап шул көндөң бер сәғәтендә кеше тәненең ҡырҡылған өлөшөнән ҡан туҡтауһыҙ аға икән.

Хиджама хаҡында Интернетта мәғлүмәттәр бик күп. Ҡыҙыҡһыныусылар был мөмкинлекте файҙаланып, белемен арттыра ала. Унда шулай уҡ ауырыуҙың төрөнә ҡарап, тәндең ҡайһы нөктәһенән ҡан алыу маҡсатҡа ярашлы икәнлеге лә әйтелә. Ябай ғына итеп аңлатҡанда, был дауалау ысулының әһәмиәте хәрәкәтһеҙ ҡалып ҡата башлаған ҡанды сығарып, урынына яңы ҡан барлыҡҡа килтереү мөмкинлеген тәьмин итеүгә бәйле. Фидан әйтеүенсә, хиджаманы һау кешеләр ҙә яһата, сөнки ҡан яңырыуы тәндә оҙаҡ ваҡыт ҡартаймай һаҡларға ярҙам итә. Күп кенә сығанаҡтар буйынса, хиджама ярҙамында түбәндәге ауырыуҙарҙы дауалап була: ҡатыу ҡалҡыу, елкә һәм яурын ауыртыуы, түбән йә юғары ҡан баҫымы, иммунитет көсһеҙләнеүе, ҡан тамырҙары тарайыуы, геморрой, простатит, енси көсһеҙлек, түлһеҙлек, баш ауыртыуы, үпкә туберкулезы, тире ауырыуҙары, йөрәк ауыртыуы, шәкәр диабеты, бәүел тотмау, быуындар ауыртыуы, ҡулдар һәм аяҡтар ойоуы, ревматизм, фалиж, күреү һәләте насарайыуы, күҙ баҫымы ауырыуы, күҙҙәрҙән йәш ағыу, ишетеү һәләте кәмеүе, гайморит, өйәнәк, күрем циклы боҙолоуы һ.б.

Тағы ла: хиджаманы күберәк ир-аттар һәм климакс осорон кисергән ҡатын-ҡыҙҙар яһата. Ғалимдар иҫәпләүенсә, ир-аттарҙың ғүмер ҡыҫҡалығы ҡандары иртә "ҡартайыуға" ла бәйле икән. Ҡатын-ҡыҙҙарға килгәндә инде, был хәл аңлашыла: тәбиғи ҡан яңырыу туҡталғандан һуң улар тиҙ генә ҡартая башлай.

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**Хиджама эшләтеүемә ай самаһы ваҡыт үтте. Дөйөм алғанда, үҙемдә барған ниндәйҙер яңырыуҙы, шуға бәйле әүҙемлекте тоям. Һүҙ башында әйтелгәнсә, булмышымдың ниндәйҙер урынында ҡайһылыр быуылған урын йырылды тәҫлә. Мин быны яҡшыға юрайым.**

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Һаулығыңды бөгөн ҡайғыртаһыңмы, әллә иртәгәгә ҡалдыраһыңмы?



***Фәйрүзә ИШБИРҘИНА, хеҙмәт ветераны:*** Бөгөн Рәсәй Хөкүмәте пенсия йәшен яҡын арала арттырмаған хәлдә лә, барыбер кешене оҙағыраҡ эшкә йәлеп итеү сәйәсәте үткәрә. Был осраҡта, әлбиттә, РФ Пенсия фонды хәлен еңеләйтеү маҡсаты күҙҙә тотолалыр, сөнки хәҙер эшләүселәргә ҡарағанда пенсионерҙар һаны күберәк бит. Пенсионерҙарҙан күпһенеү эсте бошора, әлбиттә, ләкин бында "миҙал"дың икенсе яғы ла бар икән әле. Ысын булһа, яныраҡ шундай мәғлүмәткә юлыҡтым: рәсәйлеләрҙе, пенсия йәше етеүгә ҡарамаҫтан, артабан да эшләтеү маҡсаты уларҙан үҙҙәренең һаулығын, тормош рәүешен, тышҡы ҡиәфәтен контролдә тотоу, хәстәрләүҙе талап итеү ниәтенән дә эшләнмәксе, йәнәһе. Ошо хаҡта абруйлы ғына эксперттар күптән фекер алыша. Ә нинә, был бит бер ҙә насар түгел! Рәсәйлеләрҙең үҙ сәләмәтлегенә ғәфү иткеһеҙ битарафлығы ла этәрәләр, тим, бындай сараға. Ә бит, ысынлап та, эшләгән кеше һәр ваҡыт үҙен йылдар буйы күнегелгән тәртиптә һәм режимда тота, сирләмәҫкә, ҡайһы бер насар ғәҙәттәрҙән алыҫ булырға тырыша, сөнки эшләр өсөн иң элек ныҡлы һаулыҡ кәрәк. Шуға күрә лә, асҡысы менән бороп ебәрелгән уйынсыҡ механизм һымаҡ, иртән тораһың да йүгерәһең, кис ҡайта ла йығылаһың. Һәм шулай хәлдән тайғансы... Эшләгән кешегә табипҡа барып күренеүе оло проблема бит, юғиһә. Ә бер барыуҙа ғына ҡаралып бөтөп тә булмай әле ул: анализға, башҡа төр диагностикаға, төрлө белгестәргә ебәрә табип. Эштән һорап, бер-ике китәһең дә, аҙаҡ, ҡырын ҡараш тоя башлағас, тикшерелеп тә бөтә алмайынса, поликлиникаға юлды ҡабатлап сирләгәнгә тиклем онотаһың. Беҙҙең медицина бит нигеҙҙә күптән башланып, аҙған сирҙәрҙе дауалау менән мәшғүл, ә иртә диагностикалау, сирҙәрҙе иҫкәртеү саралары менән бөтөнләй тип әйтерлек шөғөлләнмәй. Батып барыусыны ҡотҡарыу батып барыусының үҙ эше, тиҙәрме әле? Бына шулай, сирең менән күҙмә-күҙ тороп ҡалаһың да, һәр төрлө экстрасенстарға, халыҡ табиптарына аҡса түләй башлайһың. Ә инде кесәң йоҡа булһа, үҙ белдегең менән дауаланаһың. Әйткәндәй, был йәнәттән йәшәйһен шифалы үләндәребеҙ: үлән барҙа үләт юҡ!

***Әнүәр ХӘЛИСОВ, уҡытыусы:*** Медицинаның бөтөн эшмәкәрлеге - фармакология индустрияһының туҡланыу мөхите ул. Ә ауырыу, тимәк, ниндәйҙер кимәлдә ошо өлкәгә табыш килтереүсе клиент. Мәҫәлән, беҙ банкка килә беҙ, кредит алабыҙ, һәм банк клиенттарҙан килгән проценттар, йәғни беҙҙең иҫәпкә йәшәй. Медицина өлкәһе лә бына ошо күренешкә оҡшаған: кешенең шәхси мәнфәғәте ахыр сиктә бына ошо индустрияға табыш килтереүгә ҡоролған. Әгәр кеше фармакология йоғонтоһона бирелһә, дарыуға бәйләнгәнлек барлыҡҡа килә. Икенсе төрлө әйткәндә, кеше үҙ һаулығын үҙе ҡайғыртырлыҡ хәлен юғалтып, тулыһынса дарыуҙар менән "дауаланыуға" күсә. Ә был, тимәк, сәләмәтлегеңде ҡулдан ысҡындырыу, тигән һүҙ. Кешенең бөгөнгө һаулығы уның фармакология индустрияһынан азат булыуҙы аңлата. Иртәгә сирләп китмәйем, тип, бөгөн дарыу ашап ултырмайһың бит инде. Һаулығың бар сағында уның ҡәҙерен белеү кәрәк, бына шул етмәй беҙгә. Ә бит сәләмәтлеккә бер тин түкмәй, бушлай һаҡлау, нығытыу юлдары бар, ул - сәләмәт йәшәү рәүеше (дөрөҫ туҡланыу, организмды сыныҡтырыу, зыянлы ғәҙәттәрҙән азат булыу, спорт менән дуҫлашыу һ.б.). Иртәгә ауырымаҫ өсөн һаулығыңды бөгөн ҡайғыртыу - кешенең үҙ ҡулында. Дөрөҫ, беҙ буштың ҡәҙерен белмәйбеҙ. Кешенең үҙ сәләмәтлегенә һаҡсыл мөнәсәбәте күп йәһәттән уның эске культураһына бәйлелер, тип уйлайым мин. Күп осраҡта ул барыбер ҙә кешенең ниндәй ғаиләлә, ниндәй шарттарҙа тәрбиә алыуына бәйле.

***Зәкирйән ӘМИНЕВ, ғилми хеҙмәткәр, юрист:*** Иртәгәгә ҡалдырырға кәрәкмәй, әлбиттә. Йәш саҡта ғына бит ул, мәңге лә таш аҡтарырҙай сәләмәт булырһың кеүек тойола. Айырыуса ир-егеттәр 45-50 йәшкә тиклем сирҙең ни икәнен дә белмәүсән була, шуға күрә лә Аллаһы Тәғәлә тарафынан беҙгә бүләк ителгән һаулыҡтың ҡәҙерен белмәйенсә, уны аяуһыҙ туҙҙырыуға дусар итәбеҙ ҙә, аҙаҡ нисек кире ҡайтарырға белмәйбеҙ. Әйткәндәй, минең үҙемдең пенсияға сыҡҡанса, тфү-тфү, амбулатория кенәгәм дә булманы. Әле лә һыр бирмәҫкә тырышыла инде. Көн һайын иртәнсәк ярты сәғәт тирәһе физзарядка яһайым. Өйҙә турник әтмәләп ҡуйғанмын, шунда күнекмәләр эшләйем. Йәйәү йөрөргә тырышам, хәрәкәттә - бәрәкәт, тиҙәр. Дөрөҫ, төндәр буйы компьютерҙа ултырырға тура килә, шуныһы бик насар тип уйлайым. Был хәҙер балалар һәм йәштәр өсөн дә хәүефле "үрмәксе" ауына әүерелде. Гиподинамия менән дә, өҫтәүенә, үсмерҙәрҙең психик сәләмәтлегенә лә янай ул. Шуға күрә интернет селтәренә сәйәхәттәребеҙҙә сама белеү кәрәктер, тием.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

МӨҒЖИЗӘЛӘР ЗАМАНЫ



# КОСМОЭНЕРГЕТИКА ҺӘМ СӘЛӘМӘТЛЕК



### Һаҡланырға өйрән

**Кеше алдында йыш сығыш яһаған, кире тәьҫиргә дусар булған кешеләргә шар формаһында өҫтәмә һаҡланыу төҙөргә тәҡдим ителә. Был иң ябай, тәбиғи һәм ҡеүәтле һаҡланыу сараһы. Шарҙың яҫылығы юҡ, унан теләһә ниндәй энергетик нур шыуып төшә.**

Күкрәгегеҙ уртаһында теннис тубы ҙурлығында бәләкәй генә туп - ҡояшты күҙ алдына килтерегеҙ, уны мөхәббәт менән тултырығыҙ, иң мөһиме, ошо мөхәббәтте тойоғоҙ. Артабан үҙегеҙ тирәләй көмөш шарҙы күҙаллағыҙ. Ул көҙгө кеүек - кире энергияны ҡаҡлыҡтыра, ә илаһи энергия үтеп инә. Уға мөхәббәт шарынан (күкрәгегеҙҙән) нур ебәреп, шул мөхитте мөхәббәт менән тултырығыҙ. Бындай мөхитте 14 көн төҙөргә - күҙ алдына килтерергә кәрәк. Иртән, төшкөһөн, кискеһен уны асыҡ итеп күҙ алдына килтерегеҙ, визуаллаштырегеҙ. Иң мөһиме - ошо шар эсендә йоҡлап китегеҙ (шул саҡта аҫҡы аң уны төн буйына төҙөйәсәк). Дөйөм алғанда, һеҙҙең был эш көнөнә 40 минут килеп сығасаҡ. 15-се көндән башлап көн һайын иртән мөхитте мөхәббәт менән тултырығыҙ һәм бер нисә секунд сәғәт йөрөшө буйынса яҡтылыҡ тиҙлегенән дә юғарыраҡ тиҙлектә әйләндерегеҙ (аҫҡы аң быны нисек эшләргә үҙе белә) һәм уға йәбешкән бысраҡ энергия ҡойолоп төшәр.

Һаҡты 15-20 сеанс үткәндән һуң ҡуйырға мөмкин. Сөнки ул ваҡытта аурағыҙ таҙара, ә бысраҡ аураны ябырға ярамай. Бындай һаҡ тулыһынса күҙ тейеүҙән, боҙомдан, сихырҙан, ҡарғыштан, арбауҙан, ҡайтарманан, зомбилаштырыуҙан, йәғни барлыҡ тышҡы кире йоғонтонан һаҡлай. Әммә шуны ла иҫтән сығарырға ярамай: асыу, көнсөллөк, ҡурҡыу, үпкәләү кеүек эске негатив теләһә ниндәй һаҡты ла юҡҡа сығара.

Сеансҡа ике ҡатын-ҡыҙ килде. Береһендә биреләр бар. Сеанс ваҡытында хәле насарайып китте - ағарҙы, ҡалтырана башланы. Дауалаусы уның эргәһенә килеп, ултырғысҡа ултыртып, уны шар эсендә тип күҙалланы ла шарҙы энергия менән тултыра башланы. Ҡатын тынысланды. Бер ни тиклем ваҡыттан һуң ул ҡурҡа башланы һәм аҙаҡ тағы тынысланды. Сеанстан һуң ул: "Минең эсемдә ҙур ауырлы йылан ултыра ине, Һеҙ уны тотоп алып, минән сығара башланығыҙ һәм һуңынан киңлеккә ырғыттығыҙ, ул шунда шартланы. Тынысланғайным ғына, икенсе бер йылан осоп килә. Асыулы, ҙур, осло тештәре күренеп тора. Мин ҡурҡтым. Ә ул осоп килгән ыңғайы нимәгәләр бәрелде лә тирәләп уратып йөрөй башланы. Мин үҙемдең шар эсендә ултырғанымды аңланым һәм тынысландым", - тип һөйләне.

Шарҙы күҙаллаһағыҙ, ул мотлаҡ һеҙҙе һаҡлаясаҡ. Бындай һаҡ - иң көслөһө һәм камилы. Ҡеүәтте ул мөхәббәт менән тултырыу иҫәбенә ала.

**Рауфан МОРТАЗИН.**

УҢЫШ ҠАҘАН



# ЫСЫН ТОРМОШҠА СӘЙӘХӘТ

## Аңығыҙҙы көйләгеҙ

**Шәхесте үҫтереү.** Ғәҙәттә, шәхси үҫешкә белем биргән йәки тормошобоҙҙоң ниндәйҙер өлкәһен яҡшыртҡан теләһә ниндәй эшмәкәрлек тәьҫир итә. Бындай үҫеш стресты кәмітә һәм яңырыу тойғоһо бирә. Бының өсөн бүленгән көндәлек ваҡытта һеҙ китап уҡый йәки күңелегеҙгә яҡкан илһамландырған музыка тыңлай алаһығыҙ. Ул сәләмәтлеккә файҙалы ниндәйҙер ризыҡ әҙерләү йәки ҡояш байыуын күҙәтеү булыуы мөмкин. Эш бары шунда: һеҙ үҙегеҙҙең аңығыҙҙы тормошоғоҙҙо яҡшыртыр сикһеҙ мәғлүмәт сығанағына тоташтыраһығыҙ. Беҙгә бары тормошто яҡшы яҡҡа үҙгәртергә һәләтле ҡеүәтле идея ғына кәрәк. Нисек тормошондо яҡшыртырға һәм рәхәтлек кисерергә тигән һорауға яуап, беҙ һулаған һауа кеүек, һауала аҫылынып тора, бары тик уларға йөрәгеңде асырға һәм уларҙы даими эҙләргә генә кәрәк. Лидер булғығыҙ киләме - күберәк уҡығыҙ. Көн һайын уҡыу өсөн ваҡыт бүлеүҙе ҡанығыҙға һеңдерегеҙ. Төшкө ашты ашамаҫҡа мөмкин, әммә шәхси үҫеш өсөн ваҡыт тапмау мөмкин түгел.

